ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-2 июнь - июль (һөтай - майай)

2021

№26 (964)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тарихи осрашыу,**
йәки Килешеүгә табан бер аҙым



3

**Һуңғы башҡорт булмайыҡ!**



8-9

**Буяуҙар менән эш итерлек...**
әйтер һүҙ, ихтыяж бар



11

**Тажзәхмәткә юлыҡмайым, тиһәң...**



13

**ТВ-программа** 14

***"Беҙҙең менән был тауға менергә бер башҡорт та ризалашманы. Улар был тауға менер алдынан доға ҡылып, нәҙер әйтеп кенә менәләр икән. Былай ғына менеүҙе улар ҙур гонаһҡа һанай. Башҡорттарҙың тәбиғәткә шул тиклем яҡын тороуы, уны һаҡлауҙарына һоҡланырлыҡ".***

***И. ЛЕПЕХИН.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Йәйге миҙгелдә берәүҙәр - диңгеҙгә, икенселәр туған тәбиғәт ҡосағына ашыға. Ҡайҙа ял яҡшыраҡ - ошо хаҡта һеҙҙең фекер?

***Эльмира ТУҠАНОВА, БР Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе:*** Коронавирустың яңы төрҙәре таралыу хәүефе сәбәпле, сит ил сиктәре һаман да ябыҡ ҡала. Ошондай шарттарҙа туризм тармағы эшмәкәрлеген эске туризм йүнәлешендә бермә-бер йәнләндереү талап ителә. Былтырғы йомғаҡтар шуны күрһәтте: Башҡортостанда үҙаллы туризм кимәле үткән йылға ҡарағанда өс тапҡырға артҡан. Бының өсөн Башҡортостанда уңайлы шарттар булдырыла. Мәҫәлән, туризм маршруттары һәм объекттарына күрһәткестәр ҡуйыла, сәфәрҙәгеләр туҡталып ял итеү, туҡланыу өсөн юл яңы сервисы ойошторола. Һәр хәлдә, профессионалдар ҡайҙа барырын яҡшы белә.

Республикабыҙҙың уны башҡа төбәктәрҙән айырып торған үҙенсәлеге - башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм уникаль тәбиғәт ынйылары ситтән дә бик күп туристар ағымын йәлеп итә. Әйткәндәй, "Рәсәйҙә ял" журналында баҫылған Милли туристик рейтинг һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан 9-сы урынды биләй. Бынан тыш, республика былтыр туристар иғтибарын иң ныҡ йәлеп итеүсе ТОП-10 төбәк иҫәбендә 8-се урынды алды.

Урындағы туристар иғтибарын йәлеп итеүҙә эште ғаиләләр һәм ҙур булмаған төркөмдәр өсөн бер-ике көнлөк ял турҙары ойоштороу ҙа һөҙөмтә бирә. Был яҡын-тирәләге күрше өлкәләрҙән дә килеп ял итеү өсөн уңайлы. Ошондай ял көнө турҙары аша уларға республикалағы ҡыҙыҡлы һәм иҫтәлекле тәбиғәт объекттары, шифаханаларыбыҙ хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт еткерергә, ыңғай тәьҫораттар тыуҙырырға бик ҡулай сара был. Һәр хәлдә, улар беҙҙә ял һәм сәйәхәт итеүҙең уңайлы, ҡыҙыҡлы, хәүефһеҙ булыуын, шул уҡ ваҡытта арзанға төшөүенә инанып, тағы ла килергә теләк белдереп ҡайтһындар.

Ҡыҫҡа ваҡытлы тур тигәндән, былтыр сентябрҙә башлап ебәрелгән "Башҡорт оҙон ғүмерлеге. Туризм" тип аталған бер көнлөк түләүһеҙ маршруттың айырыуса популярлыҡ яулап өлгөрөүен билдәләргә кәрәк. Был маршрут хаҡлы ялдағы 55 йәштән өлкән ҡатындарҙы һәм 60 йәштән өлкән ирҙәрҙе Башҡортостандың билдәле тәбиғәт объекттары, мәҙәни ҡомартҡылары, иҫтәлекле урындары менән таныштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған. Бөгөнгө көн был йүнәлештә ошондай маршруттар эшләй: Торатау шиханы - Воскресенское ауылы; Красный Ключ сығанағы; Красноусол шифаханаһы - Ташаҫты; Бөрө - сауҙагәрҙәр ҡалаһы, оҫта ҡулдар ҡалаһы; Нарыҫтау туристар базаһы; "Изге Ғәли" изге сығанаҡ" һәм башҡалар.

## АФАРИН!

# ТЫРЫШҠАНДЫ...

## уңыш, еңеү, баһалау көтә



**Мәктәп уҡыусылары Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырыуҙы дауам итә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, әле республикала имтиханын 100 балға тапшырған 84 уҡыусы булыуы билдәле. Шул иҫәптән Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Гөлназ Ишемғужина ике предмет - рус теле һәм химия буйынса иң юғары баһаға өлгәшкән. Уның синыфташы Гөлназ Байғужина география фәненән, Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан Юлиә Хәлилова рус теле буйынса шулай уҡ 100 балл йыйған.**

Ә беҙ ике фәнде берҙәй яҡшы белгән Гөлназ Ишемғужина менән һөйләшеп алдыҡ. Ул Бөрйән районы ҡыҙы, 7-се синыфҡа тиклем Иҫке Монасип ауылы мәктәбендә уҡыған. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында ул үҙен тик "бишле"гә өлгәшеүсе аҡыллы, тырыш уҡыусы итеп таныта. Белем усағында ғына түгел, республика кимәлендә уҙғарылған төрлө олимпиадаларҙа ла еңеүҙәр яулай. Мәҫәлән, 9-сы синыфта уҡығанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаһының еңеүсеһе була, быйыл Өфө дәүләт нефть техник университеты олимпиадаһында, Башҡорт дәүләт медицина университетының химия һәм биология предметтары буйынса олимпиадаларында беренсе урындарҙы яулай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Күрҙек инде беҙ ҙә Төркиәне лә, башҡаһын да, ләкин үҙебеҙҙәге аулаҡлап ял итеүгә етәме һуң. Урындағы ял ғаилә бюджетына ла һуҡтырмай, аҡсаң республика ҡаҙнаһына китә, ә сит ил мәнфәғәтенә түгел.*



АФАРИН!

# ТЫРЫШҠАНДЫ...

## уңыш, еңеү, баһалау көтә

**(Башы 1-се биттә).**

- Берҙәм дәүләт имтихандарына етди әҙерләндем, гимназияла уҡытыусылар менән дә, үҙаллы ла күп шөғөлләндем. Үҙемә марафондар ойоштора торғайным: йә ай дауамында 100 мәсьәләне сисергә, йә көн һайын инша яҙырға маҡсат ҡуям, - тип һөйләй Гөлназ. - Химия фәне бик күптән ҡыҙыҡһындыра, шуға уның буйынса юғары һөҙөмтәгә өлгәшеремдә шик юҡ ине, ә бына рус теленә быйыл 11-се класҡа килгәс кенә ныҡлап иғтибар бүлә башланым. Тулаҡһеҙ курстар үттем, бығa тиклем белгәндәремде ҡабатлап сыҡтым. Шулай уҡ биология буйынса ла имтихан тапшырҙым, әлегә һөҙөмтәләрен көтәм. Теүәл фәндәрҙән төндәр буйы йоҡламай әҙерләнеп, иртәнсәк дәрестәргә барыуы ауырлаша башлағас, көнөмдөң һәр сәғәтен планлаштырыуҙы ғәҙәт итеп алдым. Ваҡытында йоҡларға ятып, ваҡытында тороп, бер минутты ла бушҡа уҙғармаҫҡа тырыштым. Шул да минә 100 балл йыйырға ярҙам иткәндер. Химия буйынса уҡытыусым Гөлнара Рамаҙанова, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусым Зифа Искәндәроваға оло рәхмәтемде белдерәм. Әлбиттә, атай-әсәйем минең өсөн төп терәк булды. Атайым Рәмил Рәхимйән улы шәхси эшҡыуар, әсәйем Лилиә Самат ҡыҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Беҙ ғаиләлә өс бала, ағайҙарым да атайыбыҙҙың юлын ҡыуалар. Ә мин, билдәле инде, киләсәктә табип һөнәрен үҙләштереү теләге менән янам. Аныҡлап әйткәндә, теш табибы булырға хыялланам һәм әлегә И.М. Сеченов исемендәге Мәскәү дәүләт медицина университеты менән Башҡорт дәүләт медицина университетына документтарымды тапшырырға ниәтләйем. Ҡайҙа уҡырға инеп китермен, белмәйем. Шулай ҙа Башҡортостанда ҡалырмын ул.

Берҙәм дәүләт имтиханына килгәндә, ул уҡыусының яуаплылыҡ кимәлен һынай, ә белем кимәлен тулыһынса тикшерә алмай, - тип дауам итте Гөлназ. - Әммә һинә белгән һорауҙар эләкһен өсөн дә тырышып әҙерләнергә кәрәк. Ихтыярлы, сыҙамлы булырға һәм шул уҡ ваҡытта артыҡ көйәләнмәү ҙә мөһим. Ваҡыты-ваҡыты менән уҡыуҙан баш күтәреп, ял итеп, яратҡан шөғөләңә иғтибар бүлергә лә онотмаҫҡа кәрәк. Мин бейейем, еңел атлетика менән шөғөлләнәм, тегеү менән ҡыҙыҡһынам, "Йәншишмә" гәзите һәм "Аманат" журналының йәш хәбәрсеһемен дә. Ҡайһы бер тиҫтерҙәрем имтихан һөҙөмтәләрен бик ауыр кисерә. Шулай ҙа 11-се класс тамамлар алдынан был имтихандарҙы тапшырасаҡты аңлайһың һәм үҙеңде ҡулға алаһың. Юғары белем алыу ҡыҙыҡһындырмай икән, был имтихандар талап ителмәгән һөнәрҙәрҙе үҙләштереү ҙә бер ҙә насар түгел: һәр кемдең ҡулынан килгән, күңеле ятҡан шөғөлө була...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ә беҙ ошо көндәрҙә мәктәп ҡыңғырауы сыңын һуңғы тапҡыр тыңлаған республиканың 19 меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыларына аҡ юлдар теләйбеҙ. Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре ниндәй булһа ла, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәһендәр ине, тибеҙ. Сөнки "тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", тип юҡҡа ғына әйтелмәгән.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Йәйге миҙгелдә берәүҙәр - диңгеҙгә, икенселәр тыуған тәбиғәт ҡосағына ашыға. Ҡайҙа ял яҡшыраҡ - ошо хаҡта һеҙҙең фекер?*

***Ришат ҒӘЙНУЛЛИН, өс бала атаһы:*** Үҙебеҙ хаҡында һис арттырмайынса туристар ғаиләһе тип әйтә алам, сөнки йәйге ялыбыҙҙы тулыһынса тыуған тәбиғәтебеҙ ҡосағында үткәрергә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Ҡатыным менән ике ул, бер ҡыҙ үҫтерәбеҙ, өсөһө лә уҡыуҙары тамамланыу менән үҙҙәренең йәтеш кенә турист биштәрҙәрен барлай башлай, поход кәрәк-яраҡтарын: фонарь, бәке, ҡармаҡтар, компас һәм башҡа шундай әйберҙәрен тултырып та ҡуялар. Ә ҡыҙыбыҙ, буласаҡ медик булараҡ, иң тәүҙә беҙҙең сәләмәтлекте ҡайғырта, "Тиҙ ярҙам" сумкаһын хәстәрләй. Мин дә палатка, резина кәмәбеҙҙе машина багажнигына урынлаштырам, ә әсәләре ҡырҙа ғаиләне ашатыу мәсьәләләрен хәл итә, кәрәкле ризыҡтар һатып ала. Бына шулай йыйынышып, машинаға тейәләбеҙ ҙә, аҙна-ун көнгә сәфәргә сығып та китәбеҙ. Республикабыҙ кинлектәрен айҡап-иңләп, уның байтаҡ билдәле урындарында булдыҡ инде, ҡайһыларына ҡабат-ҡабат та килеп сыҡҡылайбыҙ - килгән һайын яңы тәьҫораттар менән байытабыҙ күңелде. Тәбиғәт биргән ләззәтте, шифаны, саф һауаны, урман, тау шишмәләренең тәмен бер ниндәй ҙә сит ил курорттарына алыштырмаясаҡбыҙ. Йылға йә күл буйына төшөп, киске усаҡта бешерелгән балыҡ һурпаһы, үлән сәйҙәре барҙа, төрөктәрҙең "швед өҫтәлдәре" ары торһон!

Ашарға бешкәс, усаҡты яҡшылап һүндерергә, тирә-йүнде ҡыйламаҫҡа өйрәнде балаларым, хатта беҙҙән алда бында ҡунаҡлап киткән моңһоҙ туристарҙан ҡалған сүпсарҙы ла, уларҙы әрләйәрләй, йыйыштыра һалып ҡуялар. Әсәһе менән һиҙҙермәй генә уларға ҡарап ҡыуанабыҙ: тәүфиҡлы, белекле, тәбиғәткә миһырбанлы балаларҙы өйҙә дүрт стена эсендә генә тәрбиәләп булмай шул, шуға күрә балалар тәрбиәһендә дөрөҫ юлдабыҙҙыр тип уйлайым. Тыуған тәбиғәтебеҙ матурлығын күрә белергә, уны баһаларға, һаҡларға тырышырға тейеш киләсәк быуын.

Үҙебеҙҙең райондағы Талҡаҫ күлендә йыл һайын булабыҙ, һис юғында, юл ыңғай һуғылып, бер көн булһа ла ҡунып китәбеҙ. Күлдең киске, төнгө күренештәрен бер ниндәй һүҙҙәр, буяуҙар менән дә һүрәтләп булмай. Унда булырға кәрәк. Легендар шихандарыбыҙға иң тәүҙә алып барҙыҡ балаларҙы. Торатау менән Ҡуштауға былтыр ҙа барып килдек. Ирәмәлгә күтәрелдек, уның ҡеүәтле энергетикаһынан көс-ҡеүәт туплап, яңы тыуғандай яңырып, күтәренке кәйеф менән ҡайттыҡ. Арҡайымдың да тәьҫир көсө шундай уҡ көслө булды.

Быйыл Белорет районының Ирәкте ҡаяһына үрләргә ниәтләйбеҙ, Алла бирһә. Урыҫтар, шулай уҡ рәсми рәүештә уны Зубчатка тип йөрөтәләр, ләкин беҙ ошо атама янына матур итеп ағастан ырып, лупа аша ҡояш нурында өтөп, "Ирәкте" тип яҙылған юл күрһәткесте урынлаштырып китмәксебеҙ.

Йыйып ҡына әйткәндә, һеҙҙең һорауға ял өсөн үҙебеҙҙең Башҡортостандан да яҡшыраҡ, уңайлыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ бер ер ҙә юҡтыр, тип яуап бирәм. Сөнки бында ял итеү өсөн бөтөн шарттар ҙа бар: һыу инәйем, ҡыҙынайым, тиһәң, йылға-күлдәре, үрмәләйем, тиһәң, ҡая һәм тауҙары, саф һауа һулайым, бәшмәк, еләк-емеш йыяйым тиһәң, урман һәм аҡландары бар - торғаны бер ожмах инде бына ҡәҙерен белгән кешегә. Күрҙек инде беҙ ҙә Төркиәне лә, Мысырҙы ла, башҡаһын да, ләкин үҙебеҙҙәге ығы-зығыһыҙ, аулаҡлап ял итеүгә етәме һуң. Икенсенән, урындағы ял ғаилә бюджетына ла һуҡтырмай, аҡсаң янда ҡала йә булмаһа республика ҡаҙнаһына китә, ә сит ил мәнфәғәтенә түгел. Илһөйәрлек тигәнең ошонда ла күренә түгелме һуң, ватандаштар?



НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең указы менән һигеҙенсе саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауҙы 19 сентябргә тәғәйенләне. Шулай итеп, ҙур парламент компанияһына рәсми старт бирелде. Өс айҙан илгә 450 федераль депутат һайларға кәрәк. Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлау менән бер үк ваҡытта төбәк кампаниялары ла уҙғарыла. Рәсәйҙең ун ике субъекты губернатор һайлай, тағы 39-ында закондар сығарыу йыйылышы депутатлығына кандидаттар өсөн тауыш биреү ойошторола. 19 сентябрҙә Өфөлә ҡала Советына ла депутаттар һайлана.

✓Республикала бөтәһе 40666 коронавирус йоҡтороу осрағы асыҡланған, уҙған тәүлектә - 122 яңы осраҡ. Тәүлек эсендә мәрхүмдәр һаны дүртәүгә артып, 578-гә еткән. Әлеге ваҡытта 1699 кеше ауырый. Бөтә осорҙа - 38 меңдән ашыу кеше, бер тәүлектә 84 пациент дауаланып сыҡҡан. 109 сирленең хәле ауыр, 78 пациент үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған.

✓25 июнгә тиклем республикала дәүләт хеҙмәткәрҙәренең - 30 проценты, ә 2 июлгә хеҙмәткәрҙәрҙең 60 проценты прививка яһатырға тейеш. Был хаҡта Радий Хәбиров 21 июндә Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә белдерҙе. "Был - минең шәхси талабым, - тине республика етәксеһе. - Хакимиәт хеҙмәткәрҙәре, Хөкүмәт ағзалары, министрҙар, иртәнән кискә тиклем халыҡты вакцина яһатырға өндәгәндәр үҙҙәре прививка эшләтмәй. Мин быны бөтөнләй аңламайым. Тимәк, беҙҙә кадрҙар эше тейешле кимәлдә ҡуйылмаған".

✓Башҡортостанда студенттарҙы вакцинаһыҙ ятаҡҡа урынлаштырмайҙар. 18 июндә вакцинацияға арналған брифинг барышында БДМУ ректоры Валентин Павлов ошо турала белдерҙе. Әлегә студенттар берләшмәһе араһында коронавирус менән ауырыу кимәле ғәҙәти, ләкин юғары уҡыу йорттарының ятаҡтарында сир сығанаҡтары барлыҡҡа килә башланы. Студенттар, 18 йәше тулған граждандар булараҡ, прививка һалдырырға тейеш.

✓Юғары уҡыу йорттарына һәм колледждарға уҡырға инеү өсөн кәрәкле документтар ҡабул итеү, һынауҙар үткәреү, апелляциялар ҡарау дистанцион режимда ойошторола. 18 йәшкә тиклемгеләргә, вакцинация үтеү, прививка эшләтергә ярамау йәки ПЦР-анализдың кире һөҙөмтәһе тураһында сертификаты булғандарға ғына килергә рөхсәт ителә.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТАРИХИ ОСРАШЫУ,

## йәки Килешеүгә табан бер аҙым

**Хәбәр ителеүенсә, 16 июнь Женевала Рәсәй президенты Владимир Путин менән АҠШ президенты Джо Байдендың тарихи осрашыуы бөтөн донъя йәмәғәтселеге һәм киң мәғлүмәт саралары иғтибарын йәлеп итте.**

Бындай иғтибар аңлашыла ла: донъя аренаһында ҡапма-ҡаршылыҡлы ике иң төп сәйәси көс булараҡ, Америкала яңы президент һайлауҙарынан һуң айырыуса киҫкенләшеп киткән "һалҡын" көрәш сәйәси көрсөккә килеп терәлгәйне инде. АҠШ тарафынан Рәсәй властары адресына ниндәй генә ғәйепләүҙәр, ала яғыуҙар, урынлы-урынһыҙға тәнҡитләүҙәр, көсләп үҙ ихтыярын бәйләргә маташыуҙар Джо Байден власҡа килгәс, уғата әҙәпһеҙ, тотанаҡһыҙ төҫ алды. Рәсәй властарының ҡурәләтә провокациялар ға бирелмәйенсә, олпат тыныслыҡ һаҡлай алыуын күреп, асыуынан шартларҙай булған Байден иһә Путинды "үлтереүсе" тип атауҙан да тартынманы. Был инде Америка президенты исемен йөрөткән юғары вазифалы кешенең үҙ-үҙенә контролде юғалтыуы булдымы, әллә көсһөҙлөгөн тойоуҙан сығырынан сығыу инеме - һәр хәлдә, Америка - Рәсәй мөнәсәбәттәре тарихында бындай түбәнлеккә юл ҡуйылғаны юҡ ине әле.

Эш бының менән генә туҡтаманы. Рәсәйҙе киберһөжүмдә ғәйепләп, Вашингтонда эшләүсе дипломаттарҙы ҡайтарып ебәреү һәм Рәсәй тарафынан эшләнгән "яуап дипломатияһы" - үҙ-ара былай ҙа сигенә килеп терәлгән мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштырыусы сүп өҫтөнә сүмәлә булды. Ниһайәт, Европа буйлап эш сәфәре барышында Байден Путинға шылтырата һәм йыйылып киткән мәсьәләләр буйынса икәү-ара күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеү хаҡында һүҙ ҡуҙғата. Был тәкдимдең Ҡырым һәм Украина, шулай уҡ башҡа Европа илдәре менән сик буйҙарына яҡын Рәсәй хәрби көстәренең әүҙемләшеүе һәм күнекмәләр үткәреү мәлемә тап килеүе шулай ҙа тиктәҫкә булмағандыр, тип уйларға ҡала. Нисек кенә булмаһын, әммә ләкин был осрашыу Ҡушма Штаттар мәнфәғәтендә генә түгел, Рәсәй өсөн дә бик кәрәк ине.



Һөйләшеүҙәр тәүҙә ике сәғәт буйына икәү-ара үткәрелгәндән һуң ике яҡтың да делегациялары тулы составта осрашты. Ике ил башлығының да үҙҙәрен бербереһе менән дуҫтарса тыныс мөғәмәләлә тотоуы журналистар иғтибарынан ситтә ҡалманы, әлбиттә. Улар йылмая, әләнәнәле ҡул ҡыҫыша, шаярып һүҙ ҡуша һәм көләшәләр. Ситтән ҡарағанда ике ил лидерының ошолай аралашыуы бер-береһенә ҡарата ихтирамлы, тыныс шарттарҙа үткән икәненә ишара һымаҡ ине. Саммит шулай ҙа билдәләнгән ваҡытынан бер сәғәткә алдараҡ тамамлана. Һөйләшеүсе яҡтар матбуғат конференцияһын бергәләп түгел, ә айырым үткәрергә хәл итә. Беренсе булып журналистар менән осрашыуға Владимир Путин сыға. Ул осрашыуҙы аныҡ һәм темаға ярашлы булды, тип баһаланы һәм коллегаһы яғынан бер ниндәй ҙә дошманлыҡ һиҙмәүен, киреһенсә, үҙ-ара килешеүгә ынтылыш булыуын билдәләне. Үҙ сиратында саммит һөҙөмтәһен Байден да ыңғай баһаланы. Рәсәй менән эшләү өсөн хәҙер аныҡ нигеҙ бар, үҙ-ара мөнәсәбәттәргә юл һалынды, ҡараштарҙағы айырымлыҡтар асыҡланды, тине ул. Президенттар ике илдең дә дипломатик миссияһын ҡабаттан тергеҙеү, илселәрҙе үҙ эш урындарына ҡайтарыу хаҡында килеште. Владимир Путин үҙ адресына "үлтереүсе" тип әйткән Байденға асыу һаҡламауы, ғәфү итеүе хаҡында ла әйтеп китте. "Байден һуңынан миңә шылтыратты һәм был мәсьәлә буйынса беҙ аңлаштыҡ. Ул осрашырға тәҡдим итте, һәм беҙ осраштыҡ. Байден бик тәжрибәле кеше",- тине ул.

Саммит һөҙөмтәләренән сығып, Путин менән Байден стратегик тотороҡлолоҡ буйынса берлектәге белдереү ҡабул итте һәм ҡоралланыуҙарҙы ике яҡлы, комплекслы контролдә тотоу хаҡында килеште. Кремлдең сайтында был хаҡта: "Ядро һуғышында еңеүсе булмаясаҡ һәм ул бер ваҡытта ла башланырға тейеш түгел", - тип әйтелә. Женевала тағы бер тема - киберхәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса консультациялар хаҡында килешелде. Һуңғы ваҡыт Американың компьютер селтәрҙәренә йышайып киткән хакерҙар һөжүме өсөн ғәйепте Вашингтон Рәсәй властары яуаплылығына йөкмәтмәксе. Ләкин Владимир Путин был йәһәттән Рәсәйҙең дә киберһөжүмдәргә дусар ителеүе хаҡында әйтте һәм, Америка сығанаҡтарына таянып, бындай һөжүмдәрҙең иң беренсе урында торған АҠШ-тың кибер киңлектәренән ебәрелеүе, икенсе урында иһә Канада биләүе хаҡында мәғлүмәт еткерҙе. Байден Рәсәй етәксеһе иғтибарына АҠШ инфраструктураларының хакерҙар һөжүменән һаҡланырға тейешле иң төп 16 секторынан торған исемлек тәҡдим итте. Яҡтар шулай итеп был йүнәлештә хәүефһеҙлек булдырыу хаҡына берлектә эш итергә һөйләшеп килеште. Украина, уның НАТО-ға инеү ихтималлығы тураһында әллә ни ентекле һөйләшеү булмаһа ла, Байден мәсьәләне Минск килешеүҙәре нигеҙендә ҡарау кәрәклегенә баҫым яһаны.

Рәсәй Президенты үҙенең матбуғат конференцияһында Байдендың оппозиция, Рәсәйҙә кеше хоҡуҡтарын боҙоу тураһында һүҙ ҡуҙғатыуына туҡталып, АҠШ властарының даими рәүештә кеше хоҡуҡтарын боҙоуға юл ҡуйыу (урамда кешеләрҙе атыу, ЦРУ-ның йәшерен төрмәләре, Афғанстанды бомбаға тотоу) факттарын иҫтәренә төшөрөргә тура килеүен әйтте. "Һөйләшеү алып барылған мәсьәләләр составында Америка төрмәләрендәге рәсәйҙәр, Рәсәйҙә ҡулға алынған американдарҙы алмаштырыу буйынса РФ Сит ил министрлығы менән АҠШ Дәүләт департаменты араһында эш йүнәлештәре ҡаралыуы, ниндәйҙер килешеүҙәргә килеү ихтималлығы хаҡында ла һүҙ барҙы", - тине В.Путин.

Ҡыҫҡаһы, күп һәм сиселешен көткән ҡырҡыу мәсьәләләрҙең бөтәһен дә бер осрашыу сиктәрендә ҡарау мөмкинлеге булмаһа ла бөгөнгө иң киҫкен, кисектергеһеҙ бурыс - ҡоралланыуҙарға контроль булдырыу һәм стратегик тотороҡлолоҡҡа өлгәшеүҙең төп маҡсат итеп ҡуйылыуы, мөнәсәбәттәрҙе артабан дауам итеү өсөн илселектәргә дипломатик миссияларын башҡарырға мөмкинлек биреү хаҡында килешеүҙәргә өлгәшеү яҡшы башланғыс булды, тип иҫәпләй сәйәси эксперттар. "Һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса өлгәшелгән килешеүҙәр уңышлылыҡ тип әйтеүгә ҡарағанда, күберәк уныш ул, - тип үҙенсәлеклерәк баһаламаһы менән уртаҡлашты Рәсәй Халыҡ-ара эштәр буйынса советтың генераль директоры Андрей Кортунов. - Әлбиттә, күберәк һәм етдирәк килешеүҙәргә лә өлгәшергә булыр ине, минеңсә. Мәҫәлән, илселек эшмәкәрлеген тулы күләмендә тергеҙеү, АҠШ менән Рәсәй араһында киберхәүефһеҙлек буйынса эш төркөмө булдырыу Мәскәү өсөн ҙур ҡаҙаныш иҫәпләнәсәк..."

Иң мөһиме, шулай ҙа хәҙер ошо алынған курстан тайпылмау, уйланмаған, көтөлмәгән дыуамал үҙешмәкәрлектәрҙән һаҡ булыу, үҙ-ара кәңәшлелек. Ә һөҙөмтәләр булырмы, юкмы әлеге һөйләшеүҙәрҙән, был, Байден әйтмешләй, бөрәй алты айҙан һуң күренер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Йәйге миҙгелдә бөрәүҙәр - диңгеҙгә, икенселәр тыуған тәбиғәт ҡосағына ашыға. Ҡайҙа ял яҡшыраҡ - ошо хаҡта һеҙҙең фекер?***

***Зөһрә ХӘКИМОВА, журналист:*** Беҙ ғаиләбеҙ менән йыл да сит илгә сәйәхәткә бара инек. Әле пандемияға бәйле ике йыл туҡтап торҙоҡ. Диңгеҙ үҙенә тарта ла тора шул, һаулыҡ өсөн бик тә файҙалы бит. Беҙ Төркиәлә - ун тапҡыр, Мысырҙа, Кипрҙа һәм Тунис илдәрендә булдыҡ. Төркиәне арҡыры-буйға йөрөп сыҡтыҡ, тиһәк тә булалыр. Бик күп иҫтәлекле урындарында булдыҡ.

Ошондай сит ерҙәрҙә ял иткәндә үҙеңә төрлө яҡлап бик күп мәғлүмәт, һабаҡтар алаһың. Кипрҙың Пафос яғында ял иткәндә, мәҫәлән, гректарҙың тыныс тормош көтөүҙәрен күҙәтеп һоҡландыҡ. Бер кем бер ҡайҙа ҡабаланмай, тик ғаилә мәнфәғәтен ҡайғыртып, тырышып, матур итеп донъя көтәләр. Шуға ла улар оҙаҡ йәшәй.

Тыуған ерендең ҡәҙерен белгең килһә, сит ергә сыҡ, тиҙәр бит. Ҡайҙа ғына булһаҡ та тыуған ерҙе һағынып ҡайтабыҙ. Бер саҡ Тунис иленең Монастир тигән яғында ял иттек. Унда диңгеҙ ҙә үҙенсәлекле. Ямғыр ҙа, яуһа, ҡойоп яуа ла, иртәгеһенә салт аяҙ ҡояшлы көн тыуа. Шунда булғанда бер хәл ныҡ тәьҫир итте. Бер аҙна үткәйне, тыуған яҡ һағындыра башланы. Етмәһә, иртән Рәсәйҙең Беренсе каналында үҙебеҙҙең ожмах еребеҙ Шүлгәнташты күрһәтәләр. Беҙ йотлоғоп, тып-тын ҡалып ҡарап ултырабыҙ... Тапшырыу бөткәс тә, бер аҙ һөйләшергә ҡыймай ултырҙыҡ. Шунда аңланыҡ, буғай, ни тиклем тыуған еребеҙҙең ҡәҙерле, ғәзиз булыуын. Үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа ла беҙ күрмәгән күпме матур урындар барлығын иҫләп, тыуған еребеҙ ҡәҙере хаҡында уйланырға тағы бер этәргес булды был. Хәҙер бына үҙебеҙҙә лә күберәк сәфәр ҡылырға тигән ниәт ҡорабыҙ. Бынау пандемия ғәләмәте генә үтеп китһен инде...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ике ведомство булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Шулай итеп, республиканың яңы Спорт министрлығы барлыҡҡа килде. Был структура физик культура һәм спорт өлкәһе өсөн яуап бирә. Спорт министрлығы етәксеһе итеп Руслан Хәбибов тәғәйенләнде. Шулай уҡ республикала Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты ойошторолдо. Дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын элекке йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры урынбаҫары Яна Гайдук башҡара.

✔Башҡортостандың һәр районында күсмә вакцинация пункттары асылыуы мөмкин. Әлеге ваҡытта күсмә бригадаларҙың матди-техник тәьминәте мәсьәләһе өйрәнелә. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, ошондай пункттар ойоштороу өсөн вакцинаны һаҡлау шарттары булдырыу мөһим. "Спутник V" препараты өсөн һалҡын селтәрҙе үтәргә кәрәк - вакцина минус 18 градуста һаҡланырға тейеш", - тине Максим Забелин. Күсмә вакцинация коллективтарҙа ла ойоштороla.

✔М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты дистанцион белем биреү һәм сессия форматына күсте. Йәйге студенттар имтихандарҙы өйҙән тапшыра. Был турала бойороҡҡа юғары уҡыу йорто ректоры Салауат Сәғитов ҡул ҡуйҙы. Әйткәндәй, бынан алда ҡайһы бер Өфө колледждары һәм техникумдары дистанцион уҡыу һәм сессия тапшырыу форматына күскәйне.

✔Башҡортостанға "Гам-Ковид-Вак"" ("Спутник V") вакцинаһының яңы партияһы килтерелде - 18 900 доза. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, препараттар Өфө, Стәрлетамаҡ һәм Нефтекама ҡалаларына бүленә. Килһе партия - 100 меңдән ашыу доза, федераль үҙәктән яҡынса мәғлүмәт буйынса, килһе аҙнала килтерелә. Әлеге ваҡытта республикала 179 вакцинация пункты эшләй. Тиҙҙән ҡайһы бер пункттарҙа һәм медицина ойошмаларында вакцинаның етмәүе ихтимал, тип иҫкәртә белгестәр.

✔6 июлдә, VI Бөтә донъя фольклориадаһы барышында, Бөрйән районы Йылҡысыҡҡан күле янында ойошторолған тантаналы сарала Аҡбуҙатҡа һәйкәл асыла. Әлеге ваҡытта был - башҡорт халҡының эпик әҫәрҙәренә берҙән-бер һәйкәл. Эпоста һүрәтләнгәнсә, толпар көмөшкә буялған, ҡеүәтле ҡанатлы, булат ҡылыслы. Һәйкәл Силәбе өлкәһенең Кәсле заводында ҡойолған. Авторы - танылған башҡорт скульпторы Өлфәт Ҡобағошов.

**✓ Иң яҡшылары тип балаларын тәрбиәләү менән шөғөлләнгән, шул уҡ ваҡытта үҙ территорияһында әүҙем граждандыҡ позицияһын биләгән, уңыш ҡаҙанған, балалары ла үҙен тормошта уңышлы итеп күрһәткән атайҙарҙы һайланыҡ.**



ҠЫҪҠАСА

# УРМАНДАР ТЕРГЕҘЕЛӘ

✓ **Башҡортостан урманды яңынан тергеҙеү майҙаны буйынса Волга буйы федераль округында - беренсе, Рәсәйҙә етенсе урынды биләй.** Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте. "Һәр төбәктең дә бындай тәбиғәт байлығы - тауҙары, далалары, йылғалары һәм урмандары юҡ. Ләкин урмандарҙы ҡарарға кәрәк, беҙ шунын өҫтөндә эшләйбеҙ, - тип белдерҙе Радий Хәбиров. - Планлы рәүештә урман ултыртыу техникаһы һатып алабыҙ. Ошо көндәрҙә махсуслашҡан машиналар Балаҡатай, Маҡар һәм Өфө урман хужалыҡтарына китте. Быйыл бөтәһе 70 трактор, культиватор - беҙҙең таулы урындар өсөн нимә кәрәк, барыһын да һатып алдыҡ. Шуны билдәләп үткем килә: аҡса, 54,5 миллион һум, башлыса федераль бюджеттан бүленде. Башҡортостан Башлығы 2020 йылда республика биләмәһендә 15,3 мең гектар урманды тергеҙеүҙәрен билдәләне. Һуңғы ун йылда был - иң юғары күрһәткес, план 109,4 процентҡа арттырып үтәлгән. Яңынан рәүештә ултыртылған урындарҙа республика 98 процент ылыҫлы ағастарҙы файҙаланырға тырыша.

✓ **Республика етәксеһе Радий Хәбиров 18 июндә юғары әҙерлек тәртибе тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе.** Төҙәтмәләргә ярашлы, 2 июлгә тиклем республикала йәшәүселәргә һәм ҡунаҡтарға халыҡ күпләп йыйылған урындарға барырға кәңәш ителмәй. Хәл ҡатмарланһа сикләүҙәр 5 июлгә тиклем дауам итәсәк. Башҡортостанда спорт һәм мәҙәниәт учреждениеларына ҡарата коронавирус сикләүҙәре көсөнә инде. Уларға түбәндәге белешмәләр менән генә инергә мөмкин: вакцинация тураһында сертификат (шул иҫәптән беренсе компонент менән); ПЦР-тестың кире һөҙөмтәһе тураһында белешмә (ул 72 сәғәт ғәмәлдә); һеҙгә прививка яһатырға ярамауы тураһында табиптан белешмә. Был ҡағиҙәләр 18 йәшкә тиклемге балаларға ҡағылмай. Бынан тыш, республикала битлек режимын һәм социаль дистанцияны һаҡлауға контроль көсәйтелә. Халыҡ күпләп йыйылған урындарҙа, шул иҫәптән майҙандарҙа, парктарҙа, скверҙарҙа, аллеяларҙа йөрөргә тәҡдим ителмәй. 29 июндән әлеге талаптар дөйөм туҡланыу (50 урынлыҡтан башлап), спорт учреждениеларына, матурлыҡ салондарына, студент ятаҡтарына, ҡала-ара пассажир ташыуға, "Орлан" поезына ҡағыла.

✓ **2021 йылдың 1 июленән Социаль страховкалау фонды ҡайһы бер түләүҙәрҙе Рәсәй түләү системаһы ярҙамында ғына күсерә башлай.** Шул иҫәптән улар - "декрет аҡсаһы" (йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиелар), баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса айлыҡ пособиелар, шулай уҡ үҙ ваҡытында радиация тәьҫиренә дусар булған хеҙмәткәрҙәргә "эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙары"н түләү. Пособие түләгәндә "Мир" картаһына күсеү 2020 йылда уҡ планлаштырылғайны. Ләкин пандемияға бәйле унын ваҡытын бер нисә тапҡыр күсерҙеләр. Уҙған йылдың декабрендә Үҙәк банк уны 2021 йылдың 1 июленә билдәләне. 2021 йылдың 30 июненә тиклем ошондай социаль ярҙам саралары алғандарға банкта "Мир" картаһына бәйләп иҫәп асырға йә иһә картаны әлеге банк иҫәбенә бәйләргә кәрәк. Әгәр быны эшләмәгәндә йәки 10 көн эсендә банкта пособиены ҡулаҡсалата алмағанда, аҡса социаль яҡлауға кире ҡайтарыла. "Мир" картаһын яңынан асылған банк иҫәбенә бәйләһәләр, уның номерын социаль яҡлау бүлегенә бирергә кәрәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҒТИБАР АРТАМЫ?



**Республикала COVID-19 менән ауырығандарға тулыраҡ диспансерлаштырыу үткәрелә. Рәсәй Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына 2021 йылдың 18 июнендә ҡул ҡуйылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

Бындай диспансерлаштырыу ике этапта ойошторола. Уларҙың тәүгеһенә ете тикшереү индерелгән: ҡандың дөйөм һәм биохимик анализы, ҡандың кислород менән туйыныу кимәлен үлсәү (сатурация), 6 минут атлап тест үткәреү, спирометрия, күкрәк ситлегенә рентген эшләү, терапевҡа инеү. COVID-19 менән сирләгәндәр өсөн был исемлеккә ҡанда D-димер концентрацияһын билдәләү анализы өҫтәлә. Уның ярҙамында тромб барлыҡҡа килеү билдәләрен асыҡларға мөмкин. Был тикшереүҙәрҙе бер көндә үтергә була.

"Уларҙың һөҙөмтәһе буйынса табиптар хроник сирҙәрҙең үҫеш билдәләрен һәм хәүефен билдәләй, кәрәк булған осраҡта, диагнозды аныҡлау өсөн пациент икенсе этапҡа ебәрелә. Унда эхокардиография, үпкәгә компьютер томографияһы үткәреү һәм аяҡтың ҡан тамырҙарына допплер тикшереүе ҡаралған. Әгәр диспансерлаштырыу һөҙөмтәләре буйынса пациентта хроник ауырыуҙар йәки уларҙың барлыҡҡа килеү хәүефе асыҡланһа, уға дауалау һәм медицина реабилитацияһы тәғәйенләнә", - тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

Тулыраҡ диспансерлаштырыу үтергә мөмкин булған медицина ойошмаларының исемлеге төбәк һаулыҡ һаҡлау органдарының рәсми сайттарында һәм берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталында баҫыла. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, бындай диспансерлаштырыу 1 июлдән башлана.

# МИҘАЛҒА ЛАЙЫҠ...



**Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы советы "Атай даны" йәмәғәт наградаһы еңеүселәрен асыҡланы.**

Быйыл был исемгә 27 атай лайыҡ булды: Гавис Әхмәров (Краснокама районы), Альсур Әхмәтов (Туймазы районы), Олег Байдуғанов (Ҡалтасы районы), Фәнзил Ғәбиҙуллин (Шишмә районы), Алексей Гордеев (Дыуан районы), Иван Грешняков (Бишбүләк районы), Петр Жук (Өфө), Тимур Йыһаншин (Өфө районы), Владимир Ишмәтов (Өфө), Раят Ишмөхәмәтов (Учалы районы), Сафа Ишмөхәмәтов (Сибай), Мәжит Ҡаскынов (Баймаҡ районы), Юрий Красноборов (Ҡариҙел районы), Айнур Ҡорманаев (Дәүләкән районы), Байрам Лоҡманов (Әбйәлил районы), Александр Лукьянов (Туймазы районы), Илдар Ниғмәтов (Көйөргәҙе районы), Владимир Попов (Бәләбәй), Константин Сергеев (Көйөргәҙе районы), Әнүр Ташбулатов (Шишмә районы), Хәлил Хәмзин (Өфө), Владимир Хәмитов (Мишкә районы), Сәлихйән Шакиров (Ауырғазы районы), Владимир Шичин (Благовещен районы), Олег Шрайнер (Өфө), Тимур Шушунов (Туймазы районы), Шәфҡәт Йосопов (Учалы районы).

"Наградаға лайыҡтарҙың күберәк икәнен аңлайбыҙ, әммә һайлап алыу юлы менән генә 184 заявканы ҡараныҡ. Һәр кандидат буйынса фекер алышып, 27 кешене һайланыҡ. Иң яҡшылары тип балаларын тәрбиәләү менән шөғөлләнгән, шул уҡ ваҡытта үҙ территорияһында әүҙем граждандыҡ позицияһын биләгән, уңыш ҡаҙанған, балалары ла үҙен тормошта уңышлы итеп күрһәткән атайҙарҙы һайланыҡ. "Атай даны" наградаһына балаларынан әүҙем граждандыҡ позицияһы булған кешеләр тәрбиәләргә тырышҡан атайҙар лайыҡ тип иҫәпләйбеҙ. Дәғүә итеүселәрҙе ошо күҙлектән ҡарап баһаланыҡ та инде", - ти республиканың Йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары, ваҡытлыса эш төркөмө етәксеһе Рәмил Рәхимов. Конкурс Башҡортостандың 2025 йылға тиклем Ғаилә сәйәсәте концепцияһын тормошҡа ашырыуҙың икенсе этабына ярашлы, Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы тарафынан 2020 йылдың февраленән алып үткәрелә. Еңеүселәрҙе тәбрикләү август-сентябрҙә ойоштороласаҡ.

# ВАҠЫТЫНАН АЛДА...



**Башҡортостанда 22 мең медицина хеҙмәткәренә ваҡытынан алда пенсия түләнә, тип хәбәр итте Пенсия фондының республика бүлексәһе.**

Ҡануниәткә ярашлы, табиптар талап ителгән махсус эш стажы булған осраҡта бөтәһе өсөн дә билдәләнгән пенсия йәшенә етерҙән алдараҡ пенсия алырға хоҡуҡлы. Ауыл ерендә - 25 йылдан, ҡала иһә 30 йылдан ашыуыраҡ эшләргә кәрәк. Һөнәри белем һәм өҫтәмә һөнәри белем алыу осоро ла уларҙың хеҙмәт стажына индерелә. Коронавирус инфекцияһы менән ауырыған пациенттарға медицина ярҙамы күрһәткән медицина хеҙмәткәрҙәренә 2020 йылдың 1 ғинуарынан 30 сентябренә тиклем эшләү осорон иҫәпләп сығарыуҙың махсус тәртибе билдәләнгән. Ваҡытынан алда пенсия алырға хоҡуҡ биргән эш көнө уларға ике стаж көнө тип иҫәпләнә. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, әлеге ваҡытта республиканың 22 625 һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәренә ваҡытынан алда пенсия түләнә, 334 медицина хеҙмәткәре ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы 2020 йылда ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғын алды. Ҡартлыҡ буйынса ваҡытынан алда страховка пенсияһы алыу өсөн нигеҙе булған һәр кем ошондай пенсияға хоҡуҡ биргән льготалы стаж дауамлылығын күҙәтеп барырға мөмкин. Мәғлүмәтте дәүләт хеҙмәттәре порталында һәм Пенсия фонды сайтында сервистар аша алырға була. Шулай уҡ зыянлы һәм ауыр хеҙмәт шарттары булған производстволә мәшғүлдәр, педагогтар, медицина хеҙмәткәрҙәре, "себерҙәр", стажы льготалы тип иҫәпләнгән башҡа категориялар-ҙың мәғлүмәт алыу мөмкинлеге бар.

# ТӨҘӘТЕҮҘӘР



**Республика Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың пленар ултырышы тәүге уҡыуҙа Башҡортостан Конституцияһына үҙгәрештәр тураһында закон проекты ҡабул итте.**

Закон проекты буйынса фекер алышыуҙарҙа комиссияға 170 тәҡдим килде. Ошо йылдың февралендә үк әле Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡорт халҡының һәм республиканың башҡа халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлау, дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен өйрәнеүгә гарантия, мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау тураһында тәҡдимдәрен ебәргәйне. Былар бөтәһе лә Башҡортостан Конституцияһына төҙәтеүҙәрҙә сағылыш тапты. Яңы редакцияла РФ буйынса йәшәү минимумынан кәм булмаған минималь эш хаҡы күләме, адреслы социаль ярҙам, социаль пособиеларҙы индексациялау ҡарала. Ғаилә ҡиммәттәренә, шул иҫәптән балиғ булған балаларҙың хеҙмәткә яраҡһыҙ ата-әсәләрен хәстәрләү бурысына айырым иғтибар бирелә. Республикала ата-бабалар тарихына тоғролоҡ, быуындар күсәгилешлеге һәм телектәшлеге, бөтөн халыҡтарҙың һәм этник берләшмәләрҙең мәҙәни үҙенсәлектәре, этномәҙәнилеге һәм күп төрлөлөгө һаҡланасаҡ. Дәүләт телдәре һәм БР халыҡтары телдәрен өйрәнеү яҡлана, БР Милли мираҫ дәүләт реестрына ингән Шүлгәнташ мәмерйәһе, "Асылыкүл", "Кандракүл", "Мораҙым тарлауыҡы", "Ирәмәл" тәбиғәт парктары, Ҡуштау, Торатау, Йөрәктау һәм башҡа тәбиғи объекттар айырым һаҡлауға алынасаҡ икәне билдәләнә.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында яңы коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле 26 июндә "Ҡашҡаҙан" паркында планлаштырылған "Ҙур сығарылыш кисәһе" булмай. "Ойоштороусылар, коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефен иҫәпкә алып, ошондай ҡарар ҡабул итте", - тип белдерҙеләр Өфөнөң Октябрь районы матбуғат хеҙмәтендә.

✓Өфөнөң Пушкин урамында урынлашҡан 52-се йорт ихатаһында Абрар Ғабдрахмановҡа мемориаль таҡтаташ асылды. Абрар Ғабдрахманов (1935 - 2013) - башҡорт композиторы, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ артисы. Бик күп йырҙар, хор, вокаль һәм инструменталь әҫәрҙәр авторы. Танылған башҡорт композиторы ошо йортта утыҙ йылдан ашыу йәшәгән.

✓22 июнь таңында Өфөнөң Еңеү паркында Мәңгелек ут янында 1418 һаны рәүешендә теҙелгән шәмдәр ҡабыҙылды. Совет халҡы тап шунса көн нацист Германияһына ҡаршы һуғышҡан. Бөйөк Ватан һуғышы башланыуҙың 80 йыллығына арналған "Хәтер шәме" Бөтә Рәсәй акцияһына Дәүләт Думаһы депутаты Илдар Бикбаев, республикала эҙәрмән хәрәкәте етәксеһе Владимир Волков, Башҡортостандың Хәрби комиссариаты вәкилдәре, ветеран ойошмалары етәкселәре һәм вәкилдәре, юнармия һәм өфөләр ҡушылды.

✓21 июндән Башҡортостанда йәмәғәт транспортында һәм халыҡ күп йөрөгән урындарҙа битлек режимын үтәүгә контроль көсәйтелә. Ҡағиҙә боҙғандарға штраф янай. Граждандарҙы яҡлау идаралығының ҡала халҡын битлек режимын үтәү кәрәклеге тураһында иҫкәрткән махсус автомобилдәре былтырғы кеүек, Өфө урамдарында, шулай уҡ алыҫтағы биләмәләрҙә йөрөп сығасаҡ. Муниципалитетта өфөләрҙе йәмәғәт урындарында битлек кейергә һәм шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә саҡыралар.

✓23 июндән "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан Чечен Республикаһының баш ҡалаһы Грозныйға тәүге тура рейс юлға сыға. Был турала "Ютэйр" авиакомпанияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Осоштар аҙнаһына ике тапҡыр - шаршамбы һәм йома көндәрендә башҡарыла. Бер яҡҡа билет хаҡы 4900 һум тора. Юлға 2 сәғәт 55 минут ваҡыт талап ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ "Ҡомартҡы" проектының төп маҡсаты - халҡыбыҙҙың боронғо милли шөғөлдәрен, һөнәр-кәсептәрен тергеҙеү. Был кәсептәр бик күп, беҙ уларҙың тик өс кенә төрөн - йөн һәм мамыҡ, ағас, күн эшкәртеү йүнәлештәрен алдыҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Киров районында һабантуй форматындағы Йәйге уйындар-2021 үтте. Тәүге тапҡыр уҙғарылған был сарала ололар өсөн дә, балаларға ла ҡыҙыҡлы төрлө уйындар, оҫталыҡ дәрестәре, күргәҙмәләр, ярыштар ойошторолдо. Шуларҙың күбеһе Өфө башҡорттары ҡоролтайы ярҙамы менән М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы тарафынан әҙерләнгән башҡорт ихатаһы эргәһендә тупланды. Айырыуса башҡорт халҡының боронғо һөнәрҙәрен тергеҙеү маҡсатында үткәрелгән "Ҡомартҡы" конкурсы иғтибарҙы йәлеп итте. Уны ойоштороусы 158-се Башҡорт гимназияһы директоры, Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Гөлназ Әхмәҙиева менән ошо бәйге тураһында һөйләштек.**

# БЫЛ КӘСЕПТӘР...

## Өфөлә лә хуплау табыр



158-се Башҡорт гимназияһы коллективы.

- Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы, баш ҡаланың ете районы ла үҙенең ниндәйҙер милли байрамын булдырырға тейеш, тигән матур башланғыс-тәҡдим менән сыҡҡайны. Бөгөн һәр район төрлө йүнәлештәге матур-матур байрамдарын үткәреп килә. Мәҫәлән, Октябрь районында - шәжәрә байрамы, Калинин районында - "Башҡорт ғаиләһе", Ленин районында - башҡорт музыка ҡоралдарында уйнаусы балалар конкурстары, Дим районында башҡорт йырҙарын башҡарыусы балаларҙың "Тамсылар" фестивале булып үтте. Әле бына беҙ Киров районы вәкилдәре булараҡ, һабантуй сиктәрендә үҙебеҙҙең "Ҡомартҡы" проектына йомғаҡ яһаныҡ, күргәҙмәләребеҙҙе ойоштороҙоҡ.

Беҙҙең "Ҡомартҡы" проектының төп маҡсаты - халҡыбыҙҙың боронғо милли шөғөлдәрен, һөнәр-кәсептәрен тергеҙеү. Был кәсептәр бик күп, әлбиттә, ә беҙ уларҙың тик өс кенә төрөн - йөн һәм мамыҡ эшкәртеү, ағас эшкәртеү, күн эшкәртеү йүнәлештәрен күҙ уңында тотоп, оҫталыҡ конкурсы иғлан иттек. Асыҡ конкурсыбыҙ баш ҡаланан ғына түгел, бөтә республика оҫталарын йыйҙы. Мәҫәлән, республиканың Нуриман, Ауырғазы, Йылайыр, Белорет, Стәрлетамаҡ, Ейәнсура һәм башҡа райондары оҫталары эштәрен ебәрҙе. Баһалама ағзалары ул эштәрҙең фотоларын, схемаларын, аңлатмаларын тикшергәндән һуң, иң-индәренә ярыштың икенсе этабына саҡырыу ебәрелде. Тап бына шул күҙҙең яуын алырҙай сәнғәт үрнәгенә әйләнгән эштәр Киров районының Йәйге уйындар-2021 һабантуйында күргәҙмәлә ҡатнашты ла инде. Башҡорт көнкүрешен сағылдырып биҙәлгән тирмәбеҙ тирәһендә шул тиклем күркәм күргәҙмә хасил булды, бар ғәм беҙҙең янға күңел асырға килде, ҡыҙыҡһынды. Күргәҙмәнән тыш, махсус рәүештә саҡырылған ағас эшкәртеү оҫтаһы Владимир Мясников, "Мосафир" күн әйберҙәр оҫтаханаһы һөнәрселәре, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре оҫтабикәһе Сәрүәр Аслаева теләүселәргә оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Виртуоз ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың улы Азамат һәр кемгә ҡумыҙ сиртергә өйрәтеп торҙо. Ғөмүмән, конкурсыбыҙ район һабантуйына йәм биргән күркәм сара булып сыҡты. Ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, уның халыҡҡа кәрәкле булыуын күрҙем, тип әйтә алам.

Конкурсыбыҙҙа етмештән ашыу ҡул эштәре менән 50-гә яҡын кеше ҡатнашты. Оҫталар эшләгән әйберҙәрҙә заман һулышы, бөгөнгөгә яраҡлаштырылған бик үҙенсәлекле ижад емештәрен күрҙек. "Ҡомартҡы" конкурсында 18 йәшкә тиклемге һәм 18 йәштән өлкән оҫталар айырым билдәләнде, уларҙы өс номинация буйынса бүләкләнек. Балалар араһында Өфө ҡалаһы, Нуриман, Ауырғазы, Белорет районларынан 9 кешегә сымһыҙ ҡолаҡсындар, маҡтау ҡағыҙҙары, ә уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға рәхмәт хаттары, иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды. Иң юғары баһаға лайыҡ булған ҡатнашыусылар - "Мосафир" күн әйберҙәр оҫтаханаһы етәксеһе Азамат Юлдашбаев, "Деды" ағас оҫтаханаһы етәксеһе Владимир Мясников һәм Йылайыр районынан Ш. Бабич исемендәге гимназия уҡыусыһы Зарема Таһирова Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Маҡтау ҡағыҙҙарына, Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайының иҫтәлекле бүләктәренә лайыҡ булды.

Киләсәктә "Ҡомартҡы" конкурсы йыл да уҙғарылыр, Өфөбөҙҙәге бер матур йолаға әүерелер һәм тағы ла күберәк ҡул эштәре оҫталарын йәлеп итер, тибеҙ. Сөнки халҡыбыҙҙың сәнғәткә, матурлыҡҡа, көнкүрешен биҙәргә ынтылышы электән билдәле һәм был йола баш ҡала башҡорттары тарафынан артабан да хупланыр, баһаланыр, тип ышанайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЙӘШӘҮ ӨСӨН...



**Йәмғиәт тағы ла ғәҙәттән тыш хәл алдында: Санкт-Петербург һәм Мәскәү ҡалаларында коронавирус инфекцияһы менән сирләүселәр һаны ҡапыл артыу сәбәпле, төбәктәрҙә тағы ла ҡәтғи саралар күрелә башланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, республикала ла тыйыуҙар индерелә. Шуға ла ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив ултырышында ла тажзәхмәт таралыуына юл ҡуймау саралары тураһында һүҙ барҙы.**

Хакимиәттең Халыҡтың сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров белдереүенсә, 21 июнгә ҡарата вакцинаның беренсе компонентын 147333 кеше алған, был үткән аҙнаға ҡарағанда 12243 кешегә күберәк. 116660 кеше тулыһынса вакцинацияны тамамлаған. Өфө ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәренең 57 проценты (645 кеше) прививка эшләткән. Муниципаль предприятиеларҙа 6777 хеҙмәткәр эшләй, уларҙың 2040-ы (37,3 проценты), ҡаланың мәҙәниәт учреждениеларының - 19,8, мәғариф учреждениеларының 28,4 процент хеҙмәткәре вакцинацияланған. Баш ҡалала вакцинациялауҙың яңы пункттары асылған: "Простор" сауҙа һәм ял үҙәге (Жуков урамы, 29); "Ҡунаҡһарай" сауҙа-эш комплексы (Үрге сауҙа майҙаны, 1); "Үҙәк" сауҙа комплексы (Цюрупа урамы, 97). Уларҙа алдан яҙылмайынса прививка эшләтергә мөмкин.

- COVID-19 менән сирләүселәр һанының артыуы вирустың һинд штамы таралыуына бәйле, - тип һөйләне Республика клиник йоғошло ауырыуҙар дауаханаһының баш табибы Азат Мөхәмәтйәнов. - Мәскәүҙә сирләүселәрҙең 89,3 процентында ошо яңы мутацияланған штамм табылған. "Дельта" атамаһы алған яңы штамдың таралыуы вакцина ярҙамында һаҡланыу зарурлығын бер нисә тапҡырға арттыра. Һинд штамын ябыҡ биналарҙа йоҡтороу 60 процентҡа етһә, асыҡ һауала 40 процент, - ти Азат Мөхәмәтйәнов.

Сығыш яһаусы белдереүенсә, тажзәхмәт хәҙер кешенән кешегә еңел йоға, һинд штамы йоғошлораҡ ҡына түгел, хатта ул зарарланған кешелә тиҙ үрсей һәм юғары көсөргәнешкә, шулай уҡ етди сиргә килтерергә мөмкин. Хатта бер тапҡыр сирләгән һәм вакцинацияланған кешеләрҙә лә яңы мутация антиматдәләрҙең әүҙемлеген кәметергә һәләтле.

Әлеге ваҡытта ҡайһы бер төбәктәрҙә йәмәғәт туҡланыуы, мәғариф, сауҙа, көнкүреш хеҙмәтләндереүе, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм энергетика, шулай уҡ матурлыҡ салондары, фитнес-клубтар, транспорт, театр, музей һ.б. хеҙмәткәрҙәре өсөн вакцинация мотлаҡ. Азат Мөхәмәтйәнов белдереүенсә, әгәр төбәктең Баш санитар табибы ҡарары булһа, вакцинация үтмәгән хеҙмәткәрҙе, әгәр вакцинацияланмаҫҡа етди сәбәбе юҡ икән, эпидемия осоронда вазифаһын башҡарыуҙан ситләтергә лә мөмкин, был осорҙа эш хаҡы түләнмәй. Алдағы аҙнанан йөклө ҡатын-ҡыҙҙы вакцинациялау башланасаҡ, был буласаҡ әсәне генә түгел, сабыйҙарҙы ла һаҡлаясаҡ.

Азат Мөхәмәтйәнов белдереүенсә, Рәсәйҙә тажзәхмәттең яңы төрө таралыу алһа, июнь һуңына тиклем илдә көн һайын ауырыусылар һаны 21500 кешегә тиклем етеүе мөмкин, һуңынан платоға сығыу күҙаллана.

- Барыһы ла ауырыясаҡ, тәү сиратта - вакцина эшләтмәгәндәр һәм алдан ауырығандар. Шуға күрә тиҙ арала прививка эшләтеү зарур. Вакциналарҙың "Дельта"ға ҡарата һөҙөмтәлелеге түбәнәйеүгә ҡарамаҫтан, ул сирҙе ауыр үткәреү һәм үлем ихтималлығын кәметә: вакцинаның икенсе дозаһын алғанда был күрһәткес 90 процентҡаса кәмей, - ти ул.

Бөгөн һәр кем һынау һәм һайлау алдында тора. Йәшәү өсөн ҡайһы һуҡмаҡ менән барырға?

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ангина

❖ Һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡ йәки шарф алып, ҡулды тығырлыҡ эҫелектәге һыуға тығырға, һығырға. Шунан 70 процентлы кер һабынын һөртөп, муйынға ҡапларға. Өҫтөнән полиэтилен йәйеп, йомшаҡ шарф йә шәл ябынырға. Был боҫламаны 1,5 сәғәттән дә артыҡ тоторға ярамай, юғиһә тирене яндыра. Тәүге дауаланыу барышында уҡ юғары температураны төшөрә.

### Мочекислый диатез

Организмда матдәләр алмашыуы боҙолоуға бәйле урат тоҙҙары арта һәм бәүелдең химик составы үҙгәрә. Был ауырыу мочекислый диатез тип атала. Уны балыҡ консервалары, ҡуҙаҡлылар, борсаҡ, томат, эсәк-ҡарын, ҡаты сәй, ит, һоло ярмаһы, колбаса төрҙәре, шулай уҡ ҡуҙғалаҡ кислотаһы булған йәшелсәләр барлыҡҡа килтерергә мөмкин. Был аҙыҡтарҙан тулыһынса баш тартырға кәрәкмәй, самаһын белеп ҡулланығыҙ. Күп итеп шыйыҡса, айырыуса таҙа һыу эсеү файҙалы. Халыҡ дауаһында мочекислый диатезды иҫкәртеү һәм матдәләр алмашыуын яйға һалыуҙың тикшерелгән ысулдары бар.

❖ 2-шәр ҡалаҡ күгүлән (спорыш) үләнен һәм гөлйемеш тамырын ваҡлап ҡушырға, 3 стакан һыу ҡойорға. Талғын утта 15 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан алда эҫе көйөнсә 1-әр стакан эсергә.

❖ Кукуруздың емешлек ауыҙын һәм гөлбаҙранды (пижма) тигеҙ миҡдарҙа алып, ваҡларға һәм ҡушырға. 3 ҡалаҡ әҙерләмәгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут парҙа ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Һәр ашарҙан алда 100-әр мл эсергә.

❖ 2 өлөш ирәүән тамыры, 3 өлөш шиңмәҫгөл сәскәһе, 5 өлөш меңъяпраҡ үләнен ваҡлап ҡушырға. 1 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ауыҙы ябыҡ быяла йә эмалле һауытта 1 сәғәт төнәтергә, шунан һөҙөргә. Төнәтмәне ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс, йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Николай Пеппе Блумингтонда (АҠШ) инглиз телендә донъя күргән "Башҡорт грамматикаһы" тигән китабында башҡорт телендә өс территориаль диалект булыуы тураһында яҙа.*



*ЙОЛАҺЫН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Буяу етештереү эшен өйрәнгәндә лә башҡорттарҙың күп яҡлы этномәҙәни бәйләнештәрен асыҡлап була. Туҡымаларҙы һәм ептәрҙе буяу өсөн бөрмәкәй (подмаренник йәки марена) тамыры ҡулланылған һәм унан ҡыҙыл төҫ алынған, һыйыр теле (серпуха) япраҡтарынан һары, артыш һәм көкөрт үләненән (плаун) йәшел төҫлө буяу сыҡҡан. Буяу сағыуыраҡ ултырһын һәм төҫө уңалмаһын өсөн көл һәм әсеүташ ҡушҡандар. Минераль буяуҙарҙан хромлы тимер ҡулланылған.

Бөрмәкәй тамырынан (ҡайһы яҡтарҙа үләнде ҡыҙыл тамыр тип тә йөрөтәләр) яһалған буяуҙы ҡулланыу Көнсығыш Европа һәм Көнбайыш Себер халыҡтарының күбеһенә билдәле булған. Был территорияла бөрмәкәйҙе сәсеп үҫтергәндәр.

Бөрмәкәй - элек Кавказда, Азияның көньяҡ өлкәләренең эҫе һәм уртаса климатында үҫкән күп йыллыҡ үҫемлек. Азия халыҡтары бөрмәкәй тамырын йөн һәм ебәкте буяу өсөн борондан ҡулланған. Ҡытай туҡыу производствоһында бөрмәкәйҙән алынған крапп (хәҙерге ализарин) иң төп буяуҙарҙың береһе булған, был турала ҡытай йылъяҙмаларында мәғлүмәт һаҡланған. Төрки күскенселәре ниндәйҙер кимәлдә ҡытайҙарҙың күп быуатлыҡ тәжрибәһенә лә таянған. Ғәҙәттә, төркиҙәр үҫемлек сүстәренән яһалған туҡымаларҙы буяған; тула һәм башҡа йөн туҡымаларҙа тәбиғи төҫтө һаҡларға тырышҡандар. Йөн еп келәмдәрҙе, тирмәне биҙәү өсөн тотонолған таҫмаларҙы һәм ирҙәр ҡушағын эшләгәндә буялған. Төҫлө йөнептәр шулай уҡ ҡайыу өсөн ҡулланылған.

Епте һелте иретмәһе менән эшкәртеү - үҫемлек буяуының сифаттарын яҡшыртыу өсөн ағас көлө, әсеүташ һәм тимер әсемтәһе менән көйҙөрөү - башта П.И. Небосильный, аҙағыраҡ С.И. Руденко башҡорттарҙа билдәләгән процестарҙы лаборатор тикшеренеүҙәр ярҙамында Ноин-Ула ҡурғандарындағы материалдарҙа ла асыҡлағандар. Е.И. Лубо-Лесниченко мәғлүмәттәренә ярашлы, шул уҡ үҙенсәлектәр боронғо ҡытай туҡымаларына ла хас булған.

Башҡорттарҙың туҡыма буяу технологияһының айырым үҙенсәлектәре булған. Ағас көлө буяулы һыуға ҡушылған, ә ҡытайҙар башта туҡыманы һелтеле һыуҙа бешереп алған; ҡырғыҙҙарҙа көлдө алдан буялған әйбергә һипкәндәр. С.И. Руденко яҙыуынса, буяу производствоһының башланғыс осоронда башҡорттар туҡыманы башта көкөрт үләне йә артыш төнәтмәһендә тотҡандар һәм бөрмәкәй бешкән һыуға йәшкелт төҫкә буялған көйө тыҡҡандар. Ҡытайҙар, хуннуларҙан айырмалы, башҡорттарҙа әсеүташ һәм тимер купоросын ҡулланыу буярға әҙерлеккә түгел, ә буяу барышына бәйле: минерал өҫтәмәләрҙе буяу иретмәһенә төшөргәндәр.

Ҡайһы бер үрҙә телгә алынған үҙенсәлектәр фин-уғыр халыҡтарында ла билдәле. Мариҙар туҡыманы алдан буяған һәм төҫтәр өҫтө-өҫтөнә ятҡан. П.С. Паллас башҡорттар кеүек мордвалар ҙа һары төҫкә буяу өсөн һыйыр теле үләнен ҡулланыуын яҙа. Буяуы оҙаҡ һаҡланһын, төҫө уңмаһын, ҡояшҡа янмаһын өсөн туҡыманы һәм епте мүк төнәтмәһендә тотҡандар; боронғо мордва ҡәберлектәрендәге әйберҙәрҙе анализлап, йәшел мүктән буяу әҙерләүҙәре асыҡланған. Был ысулды башҡорттар ҙа белгән. Шулай уҡ туҡыма буяуҙа башҡорттар менән ханттар, иртыш уғырҙары ғәҙәттәрендә лә уртаҡлыҡтар бар.

Биҙәгәндә сиратлаштырылған төҫтәр халыҡтың художество традицияларын ҡылыҡһырлай. Башҡорттарҙа ҡыҙыл, охра төҫөндәге һары һәм йәшел төҫтән торған йәйғорло теҙмә өҫтөнлөк иткән. Кейемдә был төҫтәрҙәге туҡымалар кәзәкей, бишмәт һәм башҡа әйбер тегеү өсөн һатып алынған ҡара туҡымалар менән аралаштырылған осраҡта бигерәк тә сағыу күренгән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ОСТАЗ-ҒАЛИМ ҺӘМ...

## уның лайыҡлы уҡыусылары



**Өфөлә Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының почетлы академигы, филология фәндәре докторы, профессор Әҙһәм Рәхим улы Тенишевтың тыуыуына 100 йыл һәм филология фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев ордены кавалеры Фирҙәүес Хисаметдинованың 70 йәшенә арналған "Диалектология. Этнолингвистика. Этимология. Мифология" тип аталған халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үтте. Уның эшендә республиканан, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан, Новосибирск һ.б. ҡалаларҙан, Төркиәнән, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан академик учреждениеларҙың тел белгестәре, филологтар һәм уҡытыусылар ҡатнашты.**

Сарала Рәсәй халыҡтарының диалекттарын һәм һөйләштәрен, диалекттарҙың һәм әҙәби телдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен өйрәнеү, төрки, славян, фин-уғыр филологияһының көнүҙәк мәсьәләләрен ҡарау, яңы диалект материалдарын өйрәнеүҙә заманса сараларҙы эҙләү, шулай уҡ компьютер лингвистикаһы, лексикография, этнолингвистика һәм мифология өлкәһендәге бәхәсле мәсьәләләрҙе тикшереү, күп мәҙәнилек киңлегендә әҙәбиәтте һәм фольклорҙы өйрәнеүҙә традицияларҙы һаҡлау мәсьәләләре ҡаралды.

Пленар ултырыш Ә. Тенишев тураһында "Пенза Тенишева" тип аталған фильм менән танышыуҙан башланды һәм йыйылыусылар тағы бер тапҡыр олуғ остаздарының тормош юлын хәтеренә төшөрҙө. Әҙһәм Тенишев Пенза ҡалаһында татар тархандары ғаиләһендә тыуа һәм ғүмерен тел ғилемен өйрәнеүгә бағышлай. Үҙенең сығышында Рәсәй Фәндәр академияһы Тел ғилеме институтының Урал-Алтай телдәре бүлеге мөдире Анна Дыбо Ә. Тенишевтың сағыштырма-тарихи тел ғилеме буйынса хеҙмәттәренә байҡау яһап, уларҙың бөгөн дә актуаль булыуын һәм телселәр өсөн ҡулланма булып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Анна Владимировна шулай уҡ диалекттарҙың бик тиҙ юғалыуын һәм телдәрҙе тикшергәндә уларҙың да кешеләрҙең шәжәрәһе булған кеүек, үҙ шәжәрәһе булыуын белдерҙе. Ниндәйҙер телдәр ҙур ағасты хәтерләтһә, төрки телдәр - ҡыуаҡ рәүешендә. Әммә Ә. Тенишевҡа тиклем бер кем дә төрки телдәрҙең генеалогияһын тикшермәгән.

Алтмыш ғилми хеҙмәт, шул иҫәптән "Төркиҙәрҙең диалекттары атласы", "Себер төркиҙәренең диалекттар атласы" авторы булған Әҙһәм Тенишевтың юбилей саралары Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә уҙғарыла, әммә Башҡортостан өсөн ул айырым урын алып тора, сөнки ғалим әҙерләгән 20-нән ашыу фән докторы араһында 8 кеше - беҙҙең республика телселәре. Филология фәндәре докторы Юлай Псәнчин үҙ сығышында был фактҡа айырыуса ентекле туҡталды. Тенишевтың Башҡортостандағы уҡыусылары араһында иң беренсе Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов була. Шулай уҡ билдәле ғалим Зиннур Ураҡсин, Фирҙәүес Хисаметдинова, Рәйсә Халиҡова, Азат Камалов һәм башҡаларға уның уҡыусыһы булыу бәхете эләгә.

Сарала шулай уҡ быйыл августа тыуыуына 135 йыл туласаҡ ғалим, Башҡортостанда башҡорт әҙәби теленең диалекттары мәсьәләһен иң беренсе булып күтәргән, төрки телдәренең диалектологияһы, лексикологияһы, терминологияһы һәм лексикография өлкәһендә танылыу алған белгес Таһир Байышев исеме лә лайыҡлы яңғырады. Заманында яҙыусы Ғәзим Шафиҡов яҙғанса "Тел ғилеме Робинзоны" булып, бер яҡтан яҡлау тапмаған, бары тик административ баҫымға дусар булған Таһир Ғәлләм улы 11 экспедицияла ҡатнашып, элекке СССР-ҙың төрлө төбәктәрендә йәшәгән башҡорттар буйынса ҙур күләмле диалект материалы йыя, уларҙы эшкәртеп, системаға һала һәм һүрәтләй. 1940 йылда "Башҡорт диалекттары һәм уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәте" тип аталған хеҙмәт баҫтыра, эҙләнеүҙәре нигеҙендә төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының телен әҙәби телдең өсөнсө айырым диалекты тип белдерә. Ошо китабы башҡорт диалектология фәнен Бөтә Союз төркиәт аренаһына сығара. Ғалим башҡорт теленең диалектологик картаһын эшләй һәм ул Сергей Руденко төҙөгән һәм "Башҡорттар" монографияһына индерелгән башҡорттарҙың этнографик картаһына оҡшаш була. 1964 йылда эмиграцияла булған билдәле совет тел белгесе, СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Николай Пеппе Блумингтонда (АҠШ) инглиз телендә донъя күргән "Башҡорт грамматикаһы" тигән китабында башҡорт телендә өс территориаль диалект булыуы тураһында яҙа һәм улар араһында төньяҡ-көнбайыш диалектын атап, Байышевтың хаҡлығын тағы бер раҫлап ҡуя.

Сараның пленар ултырышында башҡорт тел ғилеменә ҙур өлөш индергән лексикограф Әкрәм Бейешев, башҡорт фольклор ғилеменә арымай-талмай хеҙмәт иткән ғалимә, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәнүзә Нәҙершина тураһында ла йылы һүҙҙәр әйтелде, уларҙың хеҙмәте юғары баһаланды.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# БАЛА МӘКТӘПКӘ БАРА

**Баланы нисә йәштән мәктәпкә ебәрергә мөмкин?** 6 йәш ярымдан 8 йәшкә тиклемге балаларҙы 2021 йылда беренсе класҡа яҙҙырырға мөмкин. 1-се класҡа бала медицина күрһәтмәһе буйынса сикләү булмаған осраҡта ғына бара ала. Саҡ ҡына иртәрәк йәки һуңыраҡ та мәктәпкә бирә алаһығыҙ, әммә бының өсөн район хакимиәтенең мәғариф идаралығынан рөхсәт кәрәк.

**Ниндәй мәктәпкә ҡарағанығыҙҙы нисек белергә?** Йортоғоҙҙан йыраҡ түгел бер нисә мәктәп булырға мөмкин. Һеҙ теләгәнегеҙҙе һайлай алаһығыҙ, әммә балағыҙҙы, тәү сиратта, йортоғоҙға беркетелгән мәктәпкә аласаҡтар. Ҡалғандарына - буш урын булған осраҡта ғына. Федераль ҡануниәттә шулай билдәләнгән. Үҙегеҙҙең ниндәй белем биреү учреждениеһына ҡарағанығыҙҙы мәғариф идаралығында йәки Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау порталында "Биләмәләрҙе беркетеү тураһында ҡарар" бүлегендә белергә мөмкин.

**Ҡабул итеү нисек бара?** Теркәлеү буйынса һәм төрлө льготаға эйә булғандарҙан ғариза 2021 йылдың 1 апреленән 30 июнгә тиклем ҡабул ителә. Ҡалған ата-әсәләрҙән - 5 июлдән 5 сентябргә саҡлы. 1-се класҡа ҡабул ителгән балалар исемлеге түбәндәге принцип буйынса эшләнә: тәүҙә өҫтөнлөккә эйә булған балалар (был мәктәптә элегерәк уҡый башлағандарҙың туғандары), артабан - ташламаға хоҡуҡлылар, шунан һуң йәшәү урыны буйынса. Быға тиклем һеҙҙе мәктәпкә тейешле документтар пакеты менән саҡырасаҡтар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтәһе лә үҙе теләгән мәктәпкә эләгә алмаған осраҡтар ҙа була. Ундай саҡта ата-әсә үҙ муниципалитетының мәғариф идаралығына мөрәжәғәт итә ала. Теләһә ниндәй осраҡта ла мәктәпкә төп нөсхәләге документтар менән шәхсән үҙегеҙгә килергә кәрәк. Әгәр мәктәпкә беркетелгән бөтә 1-се класс уҡыусылары ла 30 июнгә тиклем ғариза яҙһа һәм класта буш урын ҡалһа, ҡалғандарҙы ла ҡабул итеү иртәрәк башлана. Шуға күрә мәктәптең рәсми сайтындағы яңылыҡтарҙы ҡарап барығыҙ.

Ғаризаны Дәүләт хеҙмәте йәки Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау порталы аша тапшырырға мөмкин. Шунда уҡ ниндәй мәктәптә нисә буш урын барлығын белә алаһығыҙ. Әммә барыбер һеҙгә мәктәпкә килергә, документтарҙың төп нөсхәһен килтерергә, ғариза, льготалары, өҫтәмә ихтыяждары, ниндәй телдә уҡырға теләүе хаҡында яҙырға килергә кәрәк буласаҡ. Бланкты мәктәптә бирәсәктәр. Әлегә ғариза яҙыу процесы тулыһынса автоматлаштырылмаған.

**Мәктәпкә барғанда кем ташламаға эйә?** Интернат булған мәктәптәргә прокуратура, суд, тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәренең балалары сираттан тыш йүнәлтмә ала. Интернаты булмаған учреждениеларға - хәрби һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре ташламаға хоҡуҡлы. 1-се класс уҡыусыһының ағаһы йәки апаһы уҡый икән, уның да был мәктәпте һайлауҙа өҫтөнлөгө бар.

**"Башинформ"дан.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

8

# Туған телем!

26-2 ИЮНЬ - ИЮЛЬ (һөтай - майай)

2021 йыл

№26 (964)

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

Ә

## НИ ӨСӨН "ҺЕРКӘҺЕ ҺЫУ КҮТӘРМӘЙ"?

Башҡортта һүҙ күтәрмәгән, тиҙ генә үпкәләп барған кешегә ҡарата "Һеркәһе һыу күтәрмәй", тиҙәр. Ни өсөн "һеркәһе һыу күтәрмәй", нимәнән килеп сыҡҡан был әйтем? Билдәле булыуынса, "һеркә" тигән һүҙҙең башҡорт телендә бер нисә мәғәнәһе бар. "Башҡортса-русса һүҙлек" авторҙары "һеркә" һүҙен "кеше тәнендә йәшәүсе паразит бөжәктең бер төрө" (Дөрөҫөрәге: бет һеркәһе, йәғни уның йомортҡаһы. - **Ред.**), "төрлө үҫемлектәрҙең орлоҡҡа тумарланған мәлендәге ваҡ ҡына, аталандырыусы өлөштәре", шулай уҡ "уксус" тип аңлата. Бет һеркәһе тураһында хәҙерге йәштәр, бәлки, белеп тә бөтмәйҙер, ә элегерәк, халыҡ ауыр йәшәгән мәлдә әҙәм балаһы бет, ҡандала кеүек бөжәктәрҙән ныҡ йонсоған.

Баҡтиһәң, баяғы әйтемдәге һеркәнең был паразит бөжәктәргә бер ҡыҫылышы ла юҡ икән. Беҙҙең "Һеркәһе һыу күтәрмәй", тигән әйтемебеҙ башҡорт тарихына барып тоташа булып сыҡты. Урта быуаттарҙа башҡорттар араһына суфыйсылыҡ тәғлимәте үтеп инә башлай. Башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнгән ғалимдар яҙған хеҙмәттәрҙән күренеүенсә, башҡорттарҙа суфыйсылыҡ ярайһы уҡ көслө була. Зәйнулла ишанды, Нәҡшбәндиә тәриҡәтен таратыусы суфыйҙарҙың иң күренеклеһе булараҡ, Иҙел-Урал, Урта Азия мосолмандары яҡшы белгән. Уны хатта халыҡтың "рухи короле", тип тә атайҙар. Ошо суфыйҙарҙың халатҡа оҡшаған өҫ кейеме Урта Азия халыҡтары телендә "һиркә" тип аталған. Ошо халатҡа, сапанға оҡшаған кейемде суфыйҙар башлығы - ишан үҙенең мөриттәренә бүләк итер булған. Мөриттәр һиркәне, изге ҡомартҡы булараҡ, ылыйырап, туҙып бөткәнсе кейгән. Йыуымайынса, гел тәндә йөрөүҙән был һиркә бысранып, ҡатып бөткән була. Һыу эләкһә, һиркә шундуҡ таралып төшкән. Шуға күрә уны йыуыуҙан файҙа булмаған. Бына шул арҡала суфыйҙар һиркәләренә һыу тейҙермәгән. Әлеге "Һеркәһе һыу күтәрмәй", тигән әйтем шул суфыйсылыҡ ныҡ таралған замандарҙа тыуған да инде. Был кейемдең "һиркә" тигән атамаһы, үҙебеҙҙең тел ҡанундарына яраҡлашып, "һеркә" формаһын ҡабул иткән. Хәҙер иһә, әйтемде тыуҙырған шарттар - суфыйҙар һәм улар менән ҡуша улар кейгән "һиркә"ләрҙең дә юҡҡа сығыуы сәбәпле, әйтемдең төп мәғәнәһе онотолған. Тап шуға күрә, "Һеркәһе һыу күтәрмәй" тигәндә күп кеше баяғы бөжәк менән бәйләнгән, тип уйлай. Ә был бөжәктең иһә (хатта ул паразит булһа ла) әйтемдәге һеркәгә бер ҡыҫылышы ла юҡ икән.

Әгәр туған телебеҙгә аралашыу сараһы тип кенә түгел, ә тарихи сығанаҡ тип тә ҡарарға өйрәнһәк, унда осраған һүҙҙәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр башҡорттоң боронғо тарихынан әллә күпме ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә ала. Ғалимдарыбыҙ (телселәр, әҙәбиәтселәр, тарихсылар һ.б.) ябай уҡыусыларға мәғәнәһе бигүк аңлайышлы булмаған һүҙҙәргә, әйтемдәргә ваҡытында аңлатма бирә барһа, ҡайһылай шәп булыр ине. Бындай аңлатыу эштәре телебеҙгә ҡарата иғтибарлы булыу һәм һаҡсыллыҡ тәрбиәләр ине, тип уйлайым.

**Закирйән ӘМИНЕВ.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Бала килеш кенә күңелемдә "Уҡытыусы булам!" тигән уй яралғанда, талпыныу менән был хыялыма ашҡынғанда, уҡытыусы һөнәренең ҙур яуаплылыҡ һәм оло сабырлыҡ талап иткәнен аңлап та етмәй инем әле. Күҙ алдыма бары һәр көн ашҡынып мәктәпкә барыуым, унда киләсәккә өмөт менән бағыусы бала күҙҙәре ҡаршылауы ине. Хыялым тормошҡа ашты: мин - уҡытыусы!**

## МИН - УҠЫТЫУСЫ!



Уҡытыусы бурысын иңдәремә йөкмәгәс кенә минең яҙмышым илем, телем, халҡым яҙмышы менән бер тамырға барып тоташҡан икәнен аңланым. Үҙ көнөм өсөн генә түгел, ә халҡым киләсәгенә лә яуаплы икәнемде, ни тиклем етди һәм яуаплы һөнәр һайлағанымды йылдан-йыл нығыраҡ тоям. Үҙемдә уҡытыусыларымдың күркәм сифаттарын күреп ғорурланам.

Башҡорт теле уҡытыусыһы... Ул - бөгөнгө көндөң маяғы. Һиңә өмөт тулы ышаныс менән заман үҙе баҡҡан. Шуға ла мин һәр дәрескә яңылыҡ алып килергә тырышам. Һөйләргә өйрәтеү, телмәр үҫтереү - минең төп маҡсатым. XXI быуат. Йәмғиәт һәм мәктәп тормошонда үҙгәрештәр бихисап. Мәктәптәрҙә уҡытыуҙың яңы технологиялары ҡулланыла, интернет аша мәғлүмәт алыу мөмкинлектәре асылды. Хәҙерге заман уҡытыусыһы төплө белемле булырға, балаларҙың психологияһын яҡшы белергә тейеш. Әлбиттә, хәҙерге заманда аҙ түләүле лә, ауыр ҙа, яуаплы ла һөнәрҙең абруйы кәмегән һымаҡ. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, заманалар үҙгәреүе менән балалар, йәш быуын үҙгәрә. Шуға күрә, "Ҡуйсы, ҡуйсы, кеше балаһын түгел, үҙ баланды аңлап булмай!" тип әйтеүселәр күп бөгөн, ҡыҙғаныска ҡаршы. Тимәк, уҡытыусы ҡайһы ғына заман, ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, уҡытыусы булып ҡала белергә тейеш, минең уйымса.

Мин һөнәр һайлауымда яңылышмағанлығымды йылдар уҙған һайын нығыраҡ аңлайым. Уҡытыусы булыу - ул минең булмышым, яҙмышым. Күҙ алдына килтерегеҙ: һеҙ бәләкәй генә ағас үҫентеһен ултыртаһығыҙ. Бер нисә тиҫтә йылдан ошо урында мәғрур, киң тармаҡлы ағас үҫеп сығасаҡ. Барыһы ла уға ҡарап һоҡланасаҡ һәм һәр береһе ирекһеҙҙән ағасты ултыртыусыны хөрмәт менән иҫкә аласаҡ. Был изге эш кешелек донъяһының булмышына хас булһа, уҡытыусы исемен йөрөтөүсе бөйөк һөнәр эйәһе иңенә икеләтә яуаплылыҡ өҫтәй. Ана шул мәғрур ағастарҙың шаулап үҫеүе беҙҙән тора ла инде.

Бала саҡта иртәнсәк радионан "Һаумыһығыҙ! Хәйерле иртә!" һүҙҙәре мине йоҡонан уятһа, хәҙер инде үҙем һәр иртәне, һәр дәресте ошо изге һүҙҙәр менән башлайым, сөнки кешенең теле ни тиклем матур, бай булһа, күңеле лә шулай гүзәл тәрбиәләнә, фекере бай, зиһене тәрән, яҡты, аңлы була. Шуға ла мин бөтә көсөмдө биреп, бөтә яҡшылыҡты уҡыусыларымдың күңеленә һеңдерергә тырышам, ерҙе, тормошто аңларға, уны яратырға өйрәтәм. Ваҡыт үтеү менән шуныһы ҡыуандыра: күп уҡыусыларым башҡорт телендә аралаша, төрлө мәктәп һәм район күләмендә үткәрелгән конкурстарҙа, сараларҙа ҡатнашалар. Күп кенә уҡыусыларым үҙ теләктәре менән башҡорт телендә сыҡҡан "Аҡбуҙат", "Аманат" журналдарына яҙылып, ҡыҙыҡһынып уҡыйҙар. Һәр уҡыусым яҡшы билдәләргә генә өлгәшергә тырыша, сөнки башҡорт телен икенсе предметтар менән бер итеп ҡуя һәм яуаплы ҡарай. Минең дәрестәремдә туған телгә ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта бара. Кем белә, бәлки, киләсәктә туған башҡорт телен ихтирам иткән, яратҡан кешеләр күберәк булыр. Уҡытыусының абруйы күтәрелер, уға ҡарата ихтирам артыр. Йомғаҡлап, шуны әйткем килә: мин бәхетле! Минең яратҡан һөнәрем, янымда һорау тулы күҙҙәре менән ҡарап торған уҡыусыларым бар. Уҡытыусы өсөн ошо иң ҙур бәхет түгелме ни!

**Замир ХАРРАСОВ,**
**Күгәрсен районы Теләүембәт урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР

## УЙЛАР ӨСӨН ДӘ ТЕЛ КӘРӘК!

● Бер нисә көн буйы ашамаҫҡа ла, эсмәҫкә лә була, тик туған телһеҙ бер нисә сәғәт тә тороу мөмкин түгел, сөнки кеше уйламайынса тора алмай һәм ул туған телендә уйлай. Һулар өсөн һауа нисек кәрәк булһа, уйлар өсөн туған тел дә шулай кәрәк.

● Тәбиғилеге сәбәпле көн дә кәрәк булып торған нәмә, ғәҙәттә, иғтибар үҙәгенән төшөп ҡалыусан. Туған телебеҙ ғүмеребеҙҙең һәр мәлен, һәр ғәмәлен, һәр шөғөлөбөҙҙө оҙатып килә. Ул кешегә ни тиклем кәрәкле булһа, шул тиклем уның өсөн тәбиғи ҙә.

● Фекерләү өсөн сит тел - яһалма тын алдырыу аппараты ул.

● Ватандаштарының туған телен тыйып, сәйәси көс эйәләре һаҡһыҙлыҡтан, уйлап еткермәүҙән йәки енәйәти холоҡһоҙлоҡтарынан кешеләрҙең яҙмыштарын боҙа, уларға үҫергә бирмәй, тимәк, нисек кенә илде һөйөүҙәре хаҡында лаф ормаһындар, шул уҡ ваҡытта уны емереүсе лә улар. Ысын илһөйәрҙәр ватандаштарының теленә ҡаршы көрәш алып бармай; аҡылһыҙлыҡ һәм хаинлыҡтың илһөйәрлек менән уртаҡлығы юҡ.

● Фекерләү туған тел категорияһы, төҙөлөшө һәм системаһына, уның һүҙлеге, грамматикаһына бәйле. Туған тел әйләнә-тирә донъяны сағылдырып, аңлатып ҡына ҡалмай, ә психологияны, белем һәм ҡиммәттәр системаһын, төшөнсәләр һәм күҙаллауҙарҙы ла барлыҡҡа килтерә.

● Өлгөрөп етеү йәшенә һәр бер кеше ни тиклемдер белем туплай, ҡараштары һәм принциптары нығына, донъяны танып-белеү һәм үҙлеген атҡарыу сараһы булараҡ, туған теленә камил эйә була.

● Туған тел - бөтөн бынан алдағы быуындар эштәренең тере йылъяҙмаһы ул. Уның арҡылы ғәйәт ҙур белем, рухи, фәнни һәм мәҙәни ҡиммәттәр тупланған. Ул ошо ҡиммәттәрҙе тыуҙырыусы, бар итеүсе, һаҡлаусы. Шуға күрә лә ул кешенең төп үҫеш ҡоралына әйләнә. Унан ҡолаҡ ҡағыу - һаҡлаусыһыҙ тороп ҡалған бер бахырға әйләнеү, тимәк.

● Кешенең фекерләү саралары нығынған тел ҡанундарына, төҙөлөшөнә, схемаһы һәм моделдәренә бәйле. Һәр бер тел үҙ өлгөләре һәм үҙенсәлектәре булған үҙаллы система. Унда кешеләр көн һайын аралаша торған ғына түгел, шул уҡ ваҡытта донъя хәлдәрен анализларға, мөнәсәбәт төрҙәре урынлаштырырға, мәғлүмәт һәм ваҡиғаларҙы билдәләргә, уларға баһа бирергә, фекер йөрөтөргә, һығымта яһарға, иртәгәһенә ышанысլы атларға булышлыҡ иткән форма һәм категориялар ҙа ойоштролған һәм системаға һалынған.

● Теге йәки был фактты төрлө телдәрҙә сағылышы беҙҙең алға йыш ҡына ғәжәйеп рәүештәрҙә күҙ алдына баҫа. Ябай ғына мәғлүмәтте биргәндә лә телдәрҙәге мөһим айырмалыҡтарҙы күреүе бик еңел. Ҡатмарлы фекерҙәр, хистәр һәм уның төҫмөрҙәре, нескә күңел үҙгәрештәрен сағылдырғанда йә ҡабул иткәндә лә был айырмалыҡтарҙы күҙ алдына килтереп ҡарарға була.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ



# ҺИН ЭШЛӘМӘҺӘҢ,

## мин эшләмәһәм...

**Башҡорт дәүләт филармонияһында баҡыйлыҡҡа күскән бер арҙаҡлы йырсыбыҙҙың хәтер кисәһенә барҙым. Тамаша залында... 38 кеше ултыра**

Нимә булды беҙгә? Кемгә әйләндек беҙ? "Тел бөтә!" тип туктауһыҙ ҡысҡырабыҙ. Беҙҙе һәр ваҡыт кемдер ҡыҫа, ситләтә, кәмһетә, рәнйетә, йәнәһе... Беҙ һәр саҡ ғәйеплеләрҙе ситтән эҙләйбеҙ. Һәм, ғәҙеттә, хөкүмәтте, дәүләтте, етәкселәрҙе әрләйбеҙ. Тик... Кем беҙгә шул йырсының хәтер кисәһенә барырға ҡамасауланы? Кем беҙгә "Аҡбуҙат", "Аманат", "Шоңҡар", "Ағиҙел" журналдарына, "Башҡортостан", "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзиттәренә яҙылырға ҡамасаулай? Кем? Глобаллашеү, интеграция, дәүләт, хөкүмәтме?

Интернетта ла тел, милләт, халыҡ тураһында күпме тауыш күтәрелә. Тик шул тел, милләт, халыҡ өсөн бар "эшмәкәрлегебеҙ" теге йәки был постҡа лайк ҡуйыуҙан да артмай бит! Ә инде репост эшләһәк, беҙ бөтөнләй геройға әйләнәбеҙ...

Әгәр ҙә бер көн килеп гәзит-журналдарыбыҙ йәшәүҙән туктай икән - власть түгел, беҙ үҙебеҙ ғәйепле буласаҡбыҙ. Сөнки бер власть та 200-300 дана менән сыҡҡан баҫманы аҡрай алмаясаҡ. Һәм шул уҡ ваҡытта 10 -15 мең дана менән сыҡҡан баҫманы япмаясаҡ. Тамашаларына, спектаклдәренә 35 кеше йөрөгән филармонияны, театрҙы бер дәүләт тә аҡрап тора алмаясаҡ...

Ярай, аҡса юҡлыҡҡа һылтанабыҙ икән, ти. Килешәм. Еңел осор түгел. Тик... Ни өсөн ниндәйҙер бер фәһеме булмаған тамашаларға, концерттарға халыҡ дәррәү йөрөй? Тимәк, ҡайҙалыр аҡса бар, ҡайҙалыр юҡ.

Беҙ ҡайҙа теләйбеҙ - шунда барабыҙ, тип әйтерһегеҙ. Һеҙ хаҡлы. Иректе сикләү юҡ. Тик бына милләт, халыҡ һәм тел тураһында ҡысҡырһаһың, хоҡуҡ яулайһың икән, һинең бар ҡылыгың, ғәмәлдәрең ошо мәнфәғәттән сығып атҡарылырға тейеш түгелме ни? Һин быны эшләмәһәң, мин быны эшләмәһәм, кемгә япһарабыҙ, кем иңенә һалабыҙ үҙебеҙҙең был ҡан менән бирелгән бурысты?

...Филармонияләгы шул кисәлә миңә бер артист килеп өндәште (мин ул ваҡытта "Башҡортостан" гәзитендә баш мөхәррир булып эшләй инем):

- Азамат ағай, гәзиттә минең турала яҙылған мәҡәлә ята, шуны баҫтырығыҙ инде, зинһар, бик оҙаҡ ятып китте... - ти.

- Ҡустым, ә һин "Башҡортостан" гәзитенә, исмаһам, өс йылға бер генә тапҡыр булһа ла яҙылып ҡара әле... Сөнки мөхәббәт ике яҡлы булырға тейеш, ике яҡлы булмаһа, мөхәббәт бары енси мөнәсәбәткә әйләнә...

Күҙҙәрен сыл-сылт йомдо артисыбыҙ. Яуап бирерлеге юҡ ине шул...

Эйе, тел бөтә, тип ҡысҡырыуы иң рәхәт ысул. Сөнки йәтеш бит: был хәлдә һин үҙеңде түгел, ҡайҙалыр, кемдәр ғәйепләйһең дә ҡуяһың. Туған телдә кемдер ҡотҡарырға тейеш... Кемдер филармонияға, театрға йөрөргә, гәзит-журналдар алдырырға тейеш... Ошо бурыстарҙы ла үтәмәгән халыҡтың хәтере бармы?.. Хәтере булмаған милләттең - киләсәге?..

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ.**

**Башҡортостанда тыуып үҫеп, ҡасандыр "бәхет эҙләп" йә иһә башҡа сәбәптәр менән ситкә сығып киткән, сит ерҙәрҙә ғүмер иткән яҡташтарыбыҙҙың башҡорт йөҙлө, әммә үҙ телендә бер һүҙ ҙә белмәгән балалары - хәҙерге "этник башҡорттар" тип аталған милләттәштәребеҙҙең күплеге кемде борсомай? Күптәренең фамилия, исеменә, йөҙөнә ҡарап ҡына беҙҙең милләтебеҙ хаҡында фаразларға була. Ә сит яҡта ғаилә ҡорған ҡыҙҙарҙың хатта фамилиялары ла инде беҙҙекенә тап килмәй, исемдәр хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ.**

# ҺУҢҒЫ БАШҠОРТ

Ситтә йәшәгән олораҡтарҙың бер-береһе менән башҡорт телендә һөйләшкеләгән бер аҙы әлегә бар барлыҡҡа. Тик... әлегә генә. Сөнки уларҙың инде үҫеп етеп, үҙҙәре лә олоғайып килгән бала-сағалары үҙ телендә һөйләшеү түгел, хатта уны аңламай ҙа. Шундай таныштарҙың үҫмер йәштәргә бер улына уның башҡортлоғо хаҡында иҫенә төшөрә башлағас: "Я не хочу быть башкиром", - тигән яуабын ишетеп, шаҡ ҡатҡайным. Туған телен белмәүендә, йөрөгәндә башҡортлоҡ рухы булмауында ла, әлбиттә, был йәштәр һис кенә лә үҙҙәре ғәйепле түгел. Ә кем? Ҡасандыр уларға әсә телен өйрәтмәгән, хәҙерге көндә хаҡлы ялға сығып, инде ейән-ейәнсәрҙәре менән дә урыҫсалап "һуҡа һөрөп" ултырған әлеге саф башҡорт телле ата-әсәләр!

Тик бөгөнгө һүҙем улар хаҡында түгел, ә хәҙерге мәлдә илебеҙҙә көн иткән милләттәштәребеҙгә ҡағыла. Ҡырҙағыларға был һүҙҙәрем барып та етмәйәсәк, тип уйлайым. Бөгөн бер зыялыларыбыҙҙың гәзитебеҙ һайын балаларҙы үҙ телендә һөйләшергә өйрәтеү хаҡында һүҙ ҡуҙғатыуҙары, йөрәк әрнетерлек мәҡәләләр яҙып сығарыуҙары тигенгә түгел. Башҡорттар ғына телен ҡайғыртып саң ҡаға тип уйлау ҙа дөрөҫ булмаҫ. Һәр халыҡ алдында торған көнүҙәк мәсьәлә бит был. Мәҫәлән, элекке Советтар Союзы составында булып, һуңынан айырылып киткән Европа дәүләттәрендәге урыҫ халҡының тел проблемаһы бөгөн һәүетемсә ҡиҫкен тора. Урыҫ милләтле кешеләрҙең теленә урындағы хөкүмәттәр тарафынан төрлө кәртәләр ҡуйыла икән, тигән мәғлүмәттәр ишетелеп ҡала. Ошоға ризаһыҙлыҡ белдергән урыҫ халҡының хәлен һәммәбеҙ ҙә аңлап торабыҙ, хатта улар өсөн борсолабыҙ ҙа.

"Үҙ күлдәгем үҙемдең тәнемә яҡыныраҡ", тиҙәр урыҫтарҙа. Тап шуның һымаҡ уҡ, мине лә үҙ милләтем нығыраҡ борсой. Әлхәмдүлиллаһ, республикабыҙҙа тел мәсьәләһе әлеге Көнбайыш илдәрендәгенән күпкә башҡасараҡ хәлдә. Бөгөн телебеҙҙе үҫтереү, өйрәнеү өсөн бар уңайлыҡтар булдырылған. Тик ни өсөн йылдан-йыл Башҡортостанда башҡортса һөйләшкән башҡорттарыбыҙ кәмей бара һуң? Бөгөн тап бына ошондай һорау үткер тора.

Ошо мәсьәләгә ҡағылышлы фекеремдең "елеген" баштан уҡ әйтеп ҡуйыйым: быныӊ өсөн кемделер (башҡа халыҡтарҙы йә юғарылағыларҙы) ғәйепләргә ашыҡмайыҡ. Нисәмәләр йыл элек, ауылдағы өләсәһенә ҡаланан ҡунаҡҡа ҡайтып, русса һөйләшеп, уйнап йөрөгән малайҙы күргәс: "Был бала башҡортса һөйләшә беләме?" - тип һорап ҡуйҙым. "Минең улым башҡортса һөйләшеп тә тормай ул!" - тип (әллә кем булып!) ғорурланып яуап ҡайтарҙы өләсәй кеше. Бына шулай, беҙ - башҡорт милләтенең вәкилдәре, үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙы үҙебеҙ үк туған телебеҙҙән ситкә тайшандырабыҙ, бына ҡайҙа бәлә! Бөгөн бер милләттәштәребеҙҙең үҙ телен "икенсе сорт"ҡа төшөрөүен күреп, кемдер әйтмешләй, "йән көйә". Теле бар саҡта, һәр милләт йәшәй, ә телдән яҙа икән, хатта паспорттарға "башҡорт" тигән әллә күпме мисәт ҡуйһаң да, ул милләт юғалыуға дусар ителә.

Советтар Союзы мәлендә бар халыҡты ла берләштереп, "совет кешеһе" тип аталған дөйөм милләткә әйләндерергә теләүселәр ҙә юҡ түгел ине (нәк теге "америҡанлы" милләте һымаҡ уҡ). Әммә, урыҫ - урыҫ булып, сыуаш - сыуаш, ә башҡорт - башҡорт булып ҡала килде. Был башлыса әлеге һәр милләттең теле һаҡланып килеүҙән, тигән инаныуҙамын мин. Ә бөгөн балаларыбыҙға тырыша-тырыша башҡа телдә өйрәтәбеҙ, "кеше араһында берәй урыҫ һүҙен яңылыш әйтеп, оятҡа ҡалмаһын, уҡыу йортона ингәндә лә иркенләп һөйләшеп йөрөһөн", йәнәһе. Элегерәк, беҙ бала саҡта, балалар баҡсаһына, унан рус мәктәбенә йөрөгән уҡыусылар ғына үҙ-ара урыҫса аралашып, әммә, өйгә ҡайтҡас, ата-әсәһе менән башҡортса һөйләшә торғайны. Хәҙер, ғаилә эсендә лә туған телдә аралашыу бөткәндән-бөтә бара. Әлеге "һыйпафон"дар ҙа үҙ ролен уйнай буғай. Хатта ауыл ерҙәрендә лә хәҙер балаларҙы әсә телендә һөйләштереү проблемаһы килеп сыҡҡылай.

Ошо хаҡта башлыса яҙыусы, журналист йә башҡорт теле уҡытыусылары күберәк борсола. Сөнки киләсәк быуындарыбыҙҙың, ғөмүмән, милләтебеҙҙең булмышы фәҡәт уның теле һаҡланып ҡалыуы менән туранан-тура бәйле булыуын яҡшы аңлай улар. Ҡаланан йәйге ялға ҡайтҡан ейәндәрен башҡортса өйрәтеү ниәте менән олатай-өләсәйҙәренең "мин урыҫса белмәйем", тип хәйләләүе ярҙам итә, тип яҙған ине гәзиттәребеҙҙең береһендә Зәки Әлибаев. Эйе, был - яҡшы, унай ысул. Мин дә балаларымдың балаларын тап ана шулай итеп туған телгә ылыҡтырырға тырыша торғайным. Был һүҙҙәр уларға баштараҡ ысынлап та тәьҫир итә. Ейәнейәнсәрҙәрең башҡорт һүҙҙәренән һөйләм төҙөп, үҙҙәренең әйтә торған фекерен матур ғына итеп әйтеп тә бирәләр. Әммә улар ҙа замана балалары бит, ауыҙыңа май булғыры, бер аҙҙан әлеге "номер" ҙа үтмәй башлай! "Мин урыҫса белмәйем" тигән һүҙеңә хәйләле ҡарап: "Беләһең, картатай, алдашма!" - тип кенә ебәрәләр...



Башҡорт мәктәбендә уҡып та, әммә урам буйында балаларҙың һәр саҡ үҙ-ара урыҫсалап сутылдашыуҙары менән бер ни ҙә эшләп булмаҫ һымаҡ. Шулай ҙа һәр ситуациянан сығыу юлдарын эҙләү кәрәк. Ошондайҙар өсөн минең тағы бер "иҫке" һыналған ысулым бар.

Ике улымдың да бала сағы, үҫмер йылдары хәрби ҡаласыҡта үтте. Һәр кемгә мәғлүм булыуынса, бөтә Рәсәйҙән (хатта СССРҙан да!) йыйылған хәрбиҙәр гарнизонында башҡорттар юҡ кимәлендә ине. Шуға күрә лә, ниндәйҙер башҡорт мәктәбе хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Бына шундай шарттарҙа,балаларымдың икеһе лә туған телен яҡшы белеп үҫте. Башҡорт грамматикаһы тураһында, әлбиттә, һүҙ бармай, әммә, "баймаҡсалап" булһа ла, иркенләп һөйләшә белеү-

ҙәре хаҡында ышанылы итеп әйтә алам. Өйҙә хәләл ефетем менән тик башҡортса ғына һөйләштек (был - иң беренсе һәм иң мөһим шарт!). Малайҙарҙы өйрәтеү бигүк еңелдән булманы. Ошо юҫыҡта һәр төрлө ысулдар ҡуллана торғас, башҡортса һөйләшкән өсөн улдарыма "премия"лар биреп ҡарарға булдым. Мәктәптән ҡайтҡас та, уларға шундай шарт ҡуям: "Кем дә кем киҫкә тиклем тик башҡотса ғына һөйләшһә, шуға - 100 һум премия. Ә берәйегеҙ урыҫса ниҙер әйтеп ебәрһә, унан - ун һум штраф". Әлеге "жвачка" тип аталған һағыҙ-мағыҙҙар, балаларҙың күҙҙәрен ҡыҙҙырғыс һәр төрлө матур ҡағыҙлы кәнфиттәр киоскыларҙа әле генә күренгеләй башлаған мәл. Киҫкә ҡәҙәре малайҙар үҙҙәренә ана шул тәмләкәстәр һатып алырлыҡ "уба-туба" аҡса эшләп ала торғайны. Башҡортса шиғыр ятлап ала икән - тағы күпмелер "өҫтәмә премия" бирәм. Ниндәйҙер хәбәр һөйләргә ынтылған өлкән улымдың яңылыш ҡына: "Папа, пап", - тип әйтә генә башлап, минең ҡарашты һиҙеп ҡалғас, тиҙ генә үҙен төҙәтә һалыуы иҫемдә: "Атай, ат"... Үҙҙәре төҙәтеп әйткәс, әлбиттә, "штраф" һалмайым. Берәү өйгә килеп инһә, ишек төбөнә иң тәүҙә йүгереп барған 4-5 йәштәрҙәге бәләкәй улымдың: "Әсәй, безгә бер абышҡа ( йә "бисә")

лыуҙарына ла ҡарамаҫтан, ҡалала йәшәгән күп кенә дин юлындағы йәштәребеҙҙең балаларын башҡорт мәктәбендә уҡытырға тырышыуын күреп һөйөнәм.

Үҙҙәре "сеп-сей" башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, ҡала еренә күсеп барған күп милләттәштәребеҙҙең балаларының башҡорт телһеҙ була барыуына эс боша. Бер ваҡыт, барыбыҙ ҙа әлеге "этник" башҡортҡа ғына әйләнеп, милләт булараҡ, бөтөнләйгә юйылып ҡуймайыҡ, тимәксемен. Кемдәргәлер, бәлки, бик сәйер (хатта ҡурҡыныс та) тойолор, әммә ҡасандыр (Аллаһ һаҡлаһын!) шундай бер замандың тыуыу ихтималлығын күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Әйтәйек, күпмелер йылдар үткәс, был тирәлә йәшәгән кешеләрҙең балаларына тарих уҡытыусыһы дәрестә ошо хаҡта бәйән итә икән ти: "Бик борон ошо ерҙәрҙә "башҡорт" тип аталған бер халыҡ йәшәгән. Ислам динен тотҡандар. Уларҙың биләгән ере, үҙенең хөкүмәте, айырым теле, яҙмаһы ла булған, тиҙәр. Фәлән-фәлән һүҙҙәр ана шул башҡорттарҙан һаҡланып ҡалған. Агиҙель, Сакмара йылғаларының, Урал тауының исеме лә шуларҙан килә икән. Үҙҙәренә генә хас ғөрөф-ғәҙәттәре, кейемдәре, йырҙары, ашамлыҡ-эсемлек төрҙәре лә булған. Әле һеҙ магазиндарҙан алып эсеп йөрөгән

# БУЛМАЙЫҠ!

килгән!" - тигәндәрен дә хәҙер иҫкә төшөрөп, көлөшөп алабыҙ. Атай-әсәй менән башҡортса һөйләшһәләр ҙә, беҙ күрмәгәндә генә үҙ-ара урыҫса "бытылдашыуҙы" хуп күрә ине улар шулай ҙа. Ни хәл итәһең... (Аҡса биреп өйрәтеү малайҙарҙы боҙоп ҡуймаҫмы, тип бер аҙ "шөрләңкереп" тә йөрөгәйнем, әммә, әлхәмдүлиллаһ, ҡурҡыуым бушҡа булып сыҡты. Бөгөнгә көн улар береһе лә "еңел аҡса" эҙләп йөрөмәй, ә һәр тинен эшләп табып ғүмер итә).

Ә бына ялға ауылға ҡартатайҙарына ҡайтҡас, улар өсөн ысынлап та "ҙур практика" башлана. Отпуск ялын башынан аҙағына тиклем ауылда үткәрергә тырыша инек. Шул арала улдарым башҡа туғандар, ауыл балалары менән аралашып, тиҙ генә телдәрен шымартып ала торғайнылар. Башҡортостанға яҡын торған гарнизонға күсеп алғас, кесе улымды хатта ҡасандыр үҙем уҡыған Баймаҡ интернат-мәктәбенә туғыҙынсы синыфҡа уҡырға ла алып килдем. Туған телен яҡшы белһен, тигән ниәт менән генә, әлбиттә. Шунда уҡыған осорҙа башҡорт теле уҡытыусыһы улымдың ҡайһы бер "ҡыҙыҡ"тарын һөйләп көлдөрә торғайны. Инша яҙғанда "ғорурланам" тигән һүҙ урынына "ғәрләнәм", "полиэтилен пакет"ты "шыптыр мешок", тип яҙған икән...

Тормош ҡороу өсөн үҙ милләтеңдән булған ҡыҙҙарҙы һайларға тырыш, тип өйрәтеү ҙә кәрәк малайҙарға. Ғаиләнең "хужабикәһе" башҡорт телле булһа, әлеге тел проблемаһының төп өлөшөн хәл иттем, тигән һүҙ. Башҡа телле килендәрҙең, әлбиттә, үҙ ягын ҡайырыуы - тәбиғи...

Ислам динендә булыуыбыҙ ҙа телебеҙҙе һаҡлауҙың гаранты булып тора, тигән инаныуҙамын үҙем. Бында әлеге "мосолман кешеһе мөслимә менән тормош ҡororға тейеш" тигән шәриғәт ҡануны ҙур роль уйнай. Барыһы ла дин юлында булған боронғо ата-бабаларыбыҙ ошо хаҡта бик яҡшы белгән. Ҡатнаш никах тигән нәмә элек бөтөнләйгә булмаған, шунлыҡтан, туған тел темаһы көнүҙәк мәсьәлә булып та тормаған. Бөгөнгө көндә, хатта ҡасандыр ата-әсәһе арҡаһында урыҫ телле булып үҫкән бу-

шифалы "кумыс" та боронғо был кешеләрҙең милли эсемлеге тигән риүәйәттәр йөрөй. Хатта ул саҡтағы ҡорт балының да "башкирский" тип аталған бер төрөнөң бөтә Ер йөҙөндә тиңе булмаған имеш. Арабыҙҙағы ҡайһы берәүҙәрҙең ҡалын ҡара ҡашлы, ҡара күҙле булыуҙары ла ана шул халыҡтың гены менән киләләр, тип фаразлай ғалимдар. Хәҙергәсә һаҡланған, һирәк кенә осраған ҡайһы бер фамилиялар ҙа ошо ерҙәрҙә йәшәгән бик боронғо кешеләрҙән ҡала килә икән. Бер-береһенә ягымлы, башҡа милләттәр менән дә һәр саҡ татыу йәшәргә тырышҡан был кешеләргә ғәжәйеп ҡунаҡсыллыҡ, ябайлыҡ, башҡаларға тиҙ ышанып барыусанлыҡ, эскерһеҙлек хас булған. Бына шундай матур халыҡ ошо иркен далаларға, урман-тауҙарға, һыуҙарға хужа булып, күпләп мал үрсетеп, етеш ғүмер иткән. Әммә, ваҡыт үтеү менән, үҙҙәренә Аллаһ Тәғәлә тарафынан бирелгән ана шул ниғмәттәренең ҡәҙерен белмәүе, динено, туған телен бөтөнләйгә битараф булыуҙары арҡаһында был кешеләр, күп кенә башҡа ҡәүем кеүек, әкренләп бүтән халыҡтар эсендә эреп, милләт булараҡ юғалып та бөткән..."

Ысынлап та, йән өшөткөс әкиәт бит был! Әлегерәк, үҙем бала саҡта, кемдер берәүҙең "һуңғы башҡорттоң ҡәбере янында һуңғы башҡорттоң һуңғы мәртәбә ҡурай уйнар мәле лә алыҫ түгел..." тип фаразлауы хаҡында ишетеп, хатта илағым килгәйне. Аллаһ һаҡлаһын, ысынлап та, әгәр үҙебеҙҙең милли булмышыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға тырышмаһаҡ, күпмелер ваҡыттан бына ошондай дәүер тыумаҫ, тигән гарантия бармы? Тиҫтәләгән быуаттарҙан һуң ошо тирәлә йәшәгән кешеләр тарих дәрестәрендә балаларына ана шундайыраҡ "йәрәк өшөткөс" хикәйәттәр һөйләп ултырмағайы! Ул саҡтарҙа беҙҙең инде әллә ҡасан уҡ был донъяла булмаясағыбыҙ ла ҡарамаҫтан, был хаҡта уйлау ҙа ҡурҡыныс бит. Ошо "әкиәт"тең тормошҡа ашып китеүенән һаҡланайыҡ, ҡәҙерле милләттәштәрем. Динебеҙҙең, милләтебеҙҙең, телебеҙҙең именлеген һорап, Раббыбыҙға һәр саҡ доға ҡылып торайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИШАРА



# ЯҠЛАҺАҠ, ҺАҠЛАҺАҠ ИНЕ...

**"Өләс, өләс, ниңә ул ҡолоған, амма бумайма хәҙел? Амма ашаһым килә, амма кәләк. Амма, амма..." Теле яңы ғына асылған һеңлемдең бәләкәй генә ҡулдары менән ҡороған алмағастың ботаҡтарын һелкетеп-һелкетеп илағаны бөгөнгөләй күҙ алдымда. Былтыр алмаларын күтәрә алмай ултырған алмағастарҙы, бәләкәй генә булһа ла, хәтерләүең әйт әле.**

Эйе, ҡасандыр атайым яратып, балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем кинәнеп ашаһын, тип ултыртҡан өс төп алмағас үҙе яҡты донъянан китеүенең икенсе яҙына сәскә атманы. Йәй уртаһында бөтә ауылға йәм биреп ултырыр, емеш өлгөртөр мәлендә өс алмағас урынына өс ҡороған сатыр ғына ултыра ине. Үкһеп илаған ейәнсәренә ҡарап әсәйем: "Илама инде, бәпкәм, быйыл олатайың тәрбиәләмәне шул уларҙы, миндә улар ҡайғылы булманы..." - тип ейәнсәре күрмәҫ элек йәшле күҙҙәрен һөрттө лә, йөҙөндә йылмайыу сатҡылыры сығарҙы: "Алмағас тәмле емештәрен бирһен өсөн уларҙы бар күңелеңде һалып тәрбиәләп тороу зарур. Быйыл тағы ла ултыртырбыҙ ҙа икәүләп уларҙы тәрбиәләп кенә торорбоҙ, йәме", - тип, арҡаһынан һөйөп йыуатты. Һеңлем: "Ялай, ялай..." - тип тиҙ генә балалығына барып, ризалашып, өләсәһе биргән кәнфитте ҡабып, артабан йүгерҙе. Йәйҙең эҫе көнөндә өй алдындағы кәртәләрҙе буярға тип сығып, һаман да эштең яртыһына ла етмәй ялҡауланып, ике ҡайындың күләгәһендә урынлашҡан эскәмйәлә бер вайымһыҙ, йәнәһе, хәл алып ултырған ҡыҙ, йәғни мин, әсәйемдең һүҙҙәренән һуң уйға ҡалам...

Эйе. Һәр нәмәне лә үҫһен, йәшәһен, балҡып торһон тиһәң, уны тәрбиәләргә, ҡурсаларға, яратырға кәрәк шул. Анау баҡсала үҫкән сәскәләргә лә, тәтелдәп йөрөгән һеңлемә лә, картуф баҡсаһын бер туҙҙырып сабып йөрөгән быҙауға ла, эргәмә килеп мырылдап аяғыма уралған бесәйгә лә, шул бесәйгә ҡарап сәүкелдәп өргән көсөккә лә, әсәйем менән атайым төҙегән ошо оло өйгә лә - һәр нәмәгә тәрбиә кәрәк. Бөгөнгә сәскәләргә һыу һипһәм, һеңлемдең сәсен тарап үреп, тәмле мәмәй тотторһам, быҙауға йәшел үлән йолҡоп һалһам, иркә бесәйемә һөт ултыртһам, сәүек көсөккә ашарға бирһәм, бая уҡ башлаған ошо ялҡытҡыс, һыу инергә ҡамасаулап торған кәртәләрҙе буяп бөтөрһәм, минең елкәнән йөк төшә. Ошолай вайымһыҙ ғына, тормошҡа бер ҡатлы ғына ҡарап йөрөгән мәлемдә мин БДУ-ның 4 курсында уҡый инем.

Бөгөн мин - 20 йыл эш стажы булған, үҙенә генә хас традициялы, бай тарихлы Халыҡтар Дуҫлығы орденлы М. Горький исемендәге 3-сө гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһымын. Бер ни тиклем аҡыл ягынын да үҫкәнмен, етдиләнгәнмен, үҙемсә тормош тәжрибәһе туплағанмын. Йәш саҡтағы уй-хыялдарыма ла хәҙер икенсе күҙлектән ҡарайым. Янымда терәк булырҙай гәзиз кешеләрем булһа ла, арҡа терәрҙәй иң яҡын кешем - атайымдың юҡлығын да иңдәремдә лә, йөрәгемдә лә, тормош юлында ла нығыраҡ тоям. Хәҙер минең ҡурсалауыма мохтаж булыусылар ҙа бер нисә тапҡырға күберәк: әсәйем, ике улыҡайым, апайым, уның өс балаһы, үҙем уҡытҡан уҡыусыларым, телем...

Эйе, эйе, мотлаҡ туған телем дә минең ҡурсалауыма, яҡлауыма мохтаж. Һәр кеше лә үҙ туған теле алдында яуаплылыҡты тойһа, бәлки, телемдең, халҡымдың яҙмышы ла икенсерәк булыр ине. Телебеҙ йәшәһен өсөн уны ҡурсалап, яҡлап, һаҡлап, һутландырып, уға нур һибеп, көс биреп торорға кәрәклеген һәр кем аңлаһын ине лә ул. Тик... Телебеҙгә ҡарата һыуыныу, уның ҡәҙерен белмәү, уға ҡарата иғтибарһыҙлыҡ күренештәре күбәйә бара һымаҡ. Бигерәк тә башҡорт халҡының йөҙөк ҡашы булған күренекле шәхестәрҙең балалары, ейән-ейәнсәрҙәренең үҙ туған телен белмәүе ауыр уйҙарға һала мине. Бөтә кешеләрҙә лә бер ҡалыпҡа һалып булмай, әлбиттә. Һәр йылғаның ике яры, таяҡтың ике осо, миҙалдың ике яғы булған кеүек, араларында иҫ китерлек итеп башҡортса йырлағандары ла, олаталарының, өләсәләренең шиғырын һөйләгәндәре лә, шартлатып үҙҙәре ижад иткәндәре лә бар. "Алма ағасынан алыҫ төшмәй" ти халҡым мәҡәле, ата-әсәһе өйҙә матур итеп үҙ туған телендә һөйләшһә, эргәлә йөрөгән бала ла телмәргә ҡушылмай ҡалмай бит. Телгә ҡарата ҡараш та, ихтирам, иғтибар, һөйөү ҙә мотлаҡ ғаиләнән, олатай-өләсәйҙән, атай-әсәйҙән башлана.

...Әсәйем менән һеңлемдең алмағастары инде егерме йылдан ашыу һәр йыл яҙ шау сәскәгә күмелә, йомарт көҙҙә һутлы алмалары менән һыйлай. Уларҙың яҡлаусылары, һаҡлаусылары, әсәйем менән һеңлем, һәр ваҡыт яндарында ғына шул. Уларҙан уҙып ошо алмағастарға тейеп ҡара! Ник тейгән ҡулға төшөрһән...

Эх, телемде яҡлаусылар ҙа күбәйһен ине тигән теләктә ҡалам мин. Тыуғандан уҡ ҡаныбыҙға, мейебеҙгә, булмышыбыҙға ингән телебеҙҙе һаҡлаһаҡ, яҡлаһаҡ ине. Яҡлаусылары булғанда телебеҙ, ғорур яңғыраған, илһам шишмәһе - башҡорт теле лә йәшәр, сәскә атыр! Әсәйем менән һеңлемдең алмағастары кеүек, телебеҙ ҙә ҡоромаҫ, ә татлы емештәрен бирер!

**Фәнгизә НАФИҠОВА,**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**
**Өфө ҡалаһы.**

*✓ Әгәр ата-әсә үҙҙәре матур итеп туған телдә һөйләшә икән, уларҙың телмәре бала өсөн үрнәк тә, киләсәктә донъяны танып белеүгә, кешеләр менән аралашыуға асҡыс та булып тора.*



АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА...

**Йәй балаларҙың баҡсаларҙан сығып, мәктәптәргә таралып китеү осоро. Һәм был мәл балалар өсөн дә, ата-әсәләр өсөн дә бик яуаплы ваҡыт. Тап мәктәпкә барып, мәктәп программаһы менән етди уҡый башлағас, балаларҙың күп кенә проблемалары асыла. Шуларҙың иң беренсеһе, ғәҙәттә, балаларҙың телмәр үҫеше. Асылда, был хәл мәктәптә генә асыҡланмай, ә баҡсаларҙа уҡ ағарылып, тейешле алымдар ҡулланыла башлай. Тап бына шул хәлдә асыҡлау һәм төҙәтеү хеҙмәтен алып бара ла инде Сибай ҡалаһының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы уҡытыусы-логопеды Гөлдәр ЙЫЛҠЫБАЕВА. Һәм беҙ уның менән был мәшәҡәттең нескәлектәре хаҡында һөйләштек.**

# ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШҺЕН, ТИҺӘГЕҘ...

**Гөлдәр Рәхимйән ҡыҙы, баланың телмәре ни өсөн үҫешмәй? Был хәлдең сәбәптәре ниндәй булырға мөмкин?**

- Мәктәпкәсә йәштәге ҡайһы бер балаларҙың телмәрендә төрлө телмәр етешһеҙлектәре була. Ҡайһы бер бала өс йәшендә лә һөйләшмәй, предметты, хәрәкәтте ым-ишара менән генә аңғарта. Хәҙерге ваҡытта иң ныҡ таралған етешһеҙлек - күп кенә балалар өндәрҙе боҙоп әйтә, өндө төшөрөп ҡалдыра, йә булмаһа, бер өндө икенсе өнгә алмаштыра, өндәрҙе ишетеп айыра белмәй. Баланың бик һуң һөйләшә башлауы дөйөм телмәрҙең үҫешеп етмәүенең беренсе билдәһе булып тора. Ә дөйөм телмәре үҫешеп етмәгән баланың психикаһы ла формалашып етмәй: ул иғтибарһыҙ, йәки иғтибарын кәрәкле объектҡа йүнәлтә алмай, ишетеү һәләте лә тотҡарлана, бала өлкәндәр артынан 3-4 ижекле һүҙҙәрҙе ҡабатлап әйтә алмай һәм хәтерләмәй. Баланың ваҡ моторикаһы үҫешеп һәм формалашып етмәү арҡаһында уға һүрәт төшөрөү, йәки пластилин менән эш итеүе ауыр бирелә.

Ҡайҙан килеп сыға һуң бала телмәрендә ошондай етешһеҙлектәр? Быһын сәбәптәре бик күп булыуы мөмкин: әсәнең ауырлы саҡта ауырыуы, баланы ауыр табыу әҙәмтәһе, сабыйҙың төрлө сирҙәре, атаәсәнең эскелеге, наркотиктар ҡулланыуы һәм генетик тайпылыштар. Йыш ҡына баланың телмәр үҫеше уның ҡул суҡтарының һәм бармаҡтарының етеҙ хәрәкәттәр башҡара алыуына бәйле була. Бармаҡ хәрәкәттәре яҡшы үҫһә, баланың телмәре лә үҫешә.

Баланың моторикаһы ниндәй кимәлдә булыуын өй шарттарында ла билдәләргә мөмкин. Быһың өсөн уға иҙәнгә "яңылыш һибелеп киткән" иҫәп таяҡсаларын йыйып алырға ҡушығыҙ. Бала таяҡсаларҙы ике бармағы менән тота алмаһа, уларҙы усына йомарлап тотһа - моторикаһы үҫешеп етмәгән була. Шулай уҡ балағыҙҙың бер бармағын ситкә шылдырыуын һорағыҙ. Моторикаһы үҫешмәгән кескәйҙең бар бармаҡтары ла ҡуша шыласаҡ. Төрлө төҫтәге түңәрәктәр һүрәтен эшләгеҙ һәм балаға был "шарҙарға" уларҙың ептәрен төшөрөргә ҡушығыҙ. Ептәр урынына һыныҡ кәкерсәктәр килеп сыҡһа, баланың моторикаһы яғынан проблемалар барлығы аңлашыла. Алты йәштәге балалар был күнекмәләрҙең барыһын да уңышлы үтәргә тейеш.

**Мәктәпкә тиклем уҡ, хатта бик бәләкәй сағында ла баланың телмәр кимәлен аңғарырға буламы икән? Йәки уны яҡшыраҡ үҫештереү өсөн нимәләр эшләргә?**

- Телде үҙләштереү һәләте балаға тыумыштан бирелә. Әсә ҡарынында уҡ бала әсәһенең тауышын ишетеп, киләсәктә үҙе һөйләшәсәк телдән



үҙенсәлектәре менән таныша. Донъяға килгәс, бала ғаиләлә үҙ телен үҙләштерә. Әгәр атаәсә үҙҙәре матур итеп туған телдә һөйләшә икән, уларҙың телмәре бала өсөн үрнәк тә, киләсәктә донъяны танып белеүгә, кешеләр менән аралашыуға асҡыс та булып тора, сөнки телмәр - төп аралашыу сараһы һәм фекерләү формаһы. Дөрөҫ телмәр төҙөй белеү - мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың төрлө яҡлы үҫеше өсөн мөһим шарт. Ошо осорҙа баланың аң кимәле үҫешә, тәүге күҙаллауы барлыҡҡа килә, тирә-йүндәге ябай бәйләнештәр тураһында белеме формалаша. Баланы тирә-йүн менән таныштырыу телмәр үҫтереү менән бергә алып барыла.

Бала дөрөҫ итеп һөйләшһен, бөтә өндәрҙе лә асыҡ, таҙа итеп әйтә белһен өсөн бәләкәй саҡтан уҡ уның менән шөғөлләнергә кәрәк. Сабый саҡтан балаға төрлө шалтырауыҡтар бирергә, уларҙың тауыштарын тыңлатырға кәрәк. Бер йәше тулып килгәндә төрлө тауыштар сығарған музыкаль уйынсыҡтар бирергә була. Бала бесәй, эт, әтәс тауыштарын, машина геүләүен тыңлап, улар сығарған тауыштарҙы айырырға өйрәнә, үҙе лә ошо ауаздарҙы ҡабатлай башлай. Был уйын-күнегеүҙәр баланың ишетеүен, иғтибарын үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Күп кенә ата-әсәләр баланың ҡасан һөйләшә башларға тейешлеге хаҡында белмәй. Теле һуң асылалыр, һөйләшер әле, тип ҡул һелтәй ҙә ҡуялар. Ҡағиҙә булараҡ, бала 1 йәше тулғансы 10-12 һүҙ әйтә белергә тейеш, ә 2 йәше тулыуға ҡыҫҡа ғына шиғырҙар, әкиәттәр өйрәнә, әйткәндә асыҡ итеп ҡабатлай башлай. Ике йәштән өс йәшкә тиклемгә балалар өлкәндәрҙең һорауын аңлап яуап бирә алырға тейеш. Ошо йәштәге балаларға "Был нимә?", "Был кем?", "Нимә эшләй?" кеүек һорауҙар биреп, уның һүҙлеген байытырға кәрәк. Әкиәтте ҡабатлатып һөйләтеү, шиғырҙар ятлатыу, йомаҡтар сисеү баланың аҡыл-зиһенен генә үҫтереп ҡалмай, ә уның үҙаллы һөйләп белеү һәләтен дә күтәрә. Баланың үҙ уй-фекерен эҙмә-эҙлекле итеп һөйләп бирә белеүе бәйләнешле телмәрҙең үҫешенә булышлыҡ итә.

Бала телмәре үҫешһен өсөн уйындар ҡулланыу бик отошло, ул уйнай һәм үҫешә. Ишетеүен, иғтибарын үҫтереү өсөн - "Ҡайҙа шалтыратталар?", "Кем нимә ишетә?", "Тынлыҡты тыңлайыҡ", ә телмәрҙе ишетеүҙе үҫтереү өсөн - "Әйт, кемдең тауышы?", "Һүҙҙе иҫеңдә ҡалдыр, ҡабатла", фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү өсөн "Кем иғтибарлы?", "Кем күберәк һүҙ уйлай?" исемле уйындарҙы ҡулланырға була. Телмәр кәмселектәрен төҙәтеү эше ни тиклем иртәрәк башланһа, һөҙөмтәһе шул тиклем яҡшыраҡ була, шуға күрә, әгәр ҙә бала телмәрендә етешһеҙлектәр бар икән, уҡытыусы-логопедтарға, белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Бөгөн күп ата-әсәләр балаларын компьютерға, телефонға тапшырып ҡуйҙы. Унда уйындар, мультфильмдар, төрлө балалар тапшырыуҙары сабыйҙарҙы үҫтерә, русса һәм хатта икенсе телдәрҙе лә өйрәнеүгә булышлыҡ итә, тигән фекерҙә улар...**

- Хәҙерге заманда беҙҙең тормошобоҙҙа бик күп урынды компьютер, телефон, интернет, телевидение биләй. Ҡайһы бер ата-әсә лә бәләкәй генә баланың телевизор, компьютер экранына ҡарап оҙаҡ ултырыуына артыҡ иғтибар бирмәй. Әммә улар компьютер уйындарының ыңғай яҡтарынан башҡа, уның кире яҡтары булыуын да иҫтә тотһон ине. Ата-әсәләр китап уҡып, әкиәттең йөкмәткеһе буйынса бала менән әңгәмәләшһә, кескәйҙәрҙә һөйләм төҙөү күнекмәләре камиллаша. Бала һорауҙарға тулы дөрөҫ яуап бирергә өйрәнә, һүҙлеге байый, ата-әсәһе менән күберәк аралаша башлай. Һуңынан, үҫә бара, ғаиләлә ата-әсә һәм бала проблемалары ла аҙыраҡ буласаҡ. Сөнки бала ата-әсәһе менән һөйләшеп өйрәнә. Кесе йәштән балаға йәш үҙенсәлегенә тап килгән ҡыҙыҡлы әкиәттәр уҡыу, һуңынан шуның буйынса фекер алышыу - былар бөтәһе лә балала китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләй һәм китап менән эш итә белеү күнекмәләрен формалаштыра. Мәктәпкә барғас, бала үҙенең уй-фекерен эҙмә-эҙлекле һәм дөрөҫ итеп әйтә белһен, телмәре үҫешкән булһын, тиһәгеҙ, уның менән телмәр уйындары уйнағыҙ. Өйҙә бергәләп йомаҡтар, ребустар, башватҡыстар сисеү, ҡыҫҡырып әкиәттәр, хикәйәләр, шиғырҙар уҡыу отошло, ә һуңынан балаға текстың йөкмәткеһен тулы итеп һөйләп бирергә тәҡдим итергә була. 5-6 йәшлектәргә ошондай уйын уйнатыу нәтижәле: алдан ҡаралған, йәки алдан уҡылған әкиәттең аҙағын бала үҙе уйлап бөтөрһөн. Был уйынды йыш ҡулланғанда баланың фекерләүе үҫешә, һүҙлеге байый, һөйләү ҡеүәһе арта, бәйләнешле телмәре үҫешә, шулай уҡ баланың атаәсәһе менән мөнәсәбәттәре лә йылы буласаҡ.

**Иртә һөйләшкән балалар ҙа була. Был да бала өсөн артыҡ файҙалы түгел, тиҙәр. Белгестәр фекере ниндәй?**

- Эйе, баланың телмәре үтә тиҙ үҫешеү осраҡтары ла була. Сабый бер йәше тулыу менән тулы һөйләмдәр менән, асыҡ итеп, өлкәндәрҙең һүҙҙәрен ҡулланып һөйләшә башлай. Был ата-әсәләрҙең ғорурлығына әүерелә. Баланы күп өйрәтәләр, уға күп һөйләйҙәр, уҡыйҙар, видеофильмдар күрһәтәләр. Бала барыһын да ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итә. Тәү ҡарамаҡҡа, барыһы ла яҡшы кеүек, тик бындай бала насар йоҡлай, төшөндә илай, хәрәкәттәре лә һулпәнәйә башлай. Был баланың нығынып етмәгән психикаһы үтә күп мәғлүмәткә ҡаршы тора алмаyын күрһәтә. Кескәйҙәрҙә ошондай нервы ауырыуҙары булмаһын өсөн ул күберәк тышта, саф һауала уйнарға, тиҫтерҙәре менән аралашырға тейеш. Һәм уны яҡшы һөйләшә, ҡыҙыҡ һөйләшә тип, ололар донъяһында йөртмәү ҙә яҡшыраҡ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**һөйләште.**

*МӘҠӘЛДӘР*

## АУЫҘҒА ҺЫЙМАҒАН ТЕЛ...
## ауылдан ҡыуҙыра

**Башҡорт халҡының телебеҙ тураһындағы ҡайһы бер мәҡәлдәре һәм әйтемдәрен иҫкә төшөрөп китәйек:**

- Әсәм биргән туған тел,
Бабам биргән ҡорал тел,
Халҡым биргән оран тел.
- Аҡыл - ҡаҙна, тел - асҡыс.
- Теле барҙың иле бар, иле барҙың көнө бар.
- Тел - ҡылыс, урынын белеп ҡый, урынын белеп тый.
- Тел өсөн баш яуап бирә.
- Ауыҙға һыймаған тел ауылдан ҡыуҙыра.
- Телһеҙҙең телен әсәһе белер.
- Тураға юл - тел менән, түрәгә юл - мал менән.
- Икмәкте ҡул бүлә, илде тел бүлә.
- Тел - күңел көҙгөһө.
- Ниндәй тел менән тыуғанһың, шул телең менән көн ит.
- Мираҫ итеп мал бир, малдан алда тел бир.
- Тел - хазина, тотонһаң, арта ғына.
- Яман әҙәм шул булыр, ауыҙында ике тел булыр,
Алдында һине ағартыр, артыңда һине ҡаралтыр.

✓ *Уның әйтер һүҙе иһә, тыуған еренә, күпте күргән Йүрүҙәненә, әсәһе менән бесән сапҡан сәскәле туғай-аҡландарына, тыуып-үҫкән ата йортона һөйөү һүҙе, уларҙы һағыныу тойғоһо.*



ИЖАДХАНА

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙға ябайҙан булмаған яҙмышлы милләттәшебеҙ, төп һөнәре - табип, вазифаһы буйынса күп йылдар дәүләт хеҙмәткәре булып эшләгән, йөрәк ҡушыуы буйынса - һәүәҫкәр рәссам Мөнир Риза улы ӘБҮБӘКИРОВ хаҡында һөйләмәксемен. Уның күңел донъяһы һәм йәшәү рәүеше башҡалар өсөн дә асыш булыр, тип уйлайым.**

# БУЯУҘАР МЕНӘН ЭШ ИТЕРЛЕК...

## әйтер һүҙ, ихтыяж бар

Мөнир Риза улы халҡыбыҙға тимерҙәй ихтыярлы полководец, шул уҡ ваҡытта нескә күңелле шағир-импровизатор Салауат батыр менән бөйөк халыҡ шағиры Рәмиҙе биргән бәрәкәтле Салауат ерендә тыуып үҫә. Рәмиҙең шиғри юлдары менән әйткәндә, "Йүрүҙәнкәй аға бормаланып, бормалары һайын бер ауыл"дарҙың береһе - Арҡауылдан Мөнир Риза улы ла. Ошо факт үҙе генә лә күп нәмә хаҡында һөйләй булыр, ләкин бөйөктәр менән бер үк һыуҙы эсеп, бер үк һауаны һулап үҫеп килгән бала ошо ер бүләк иткән тәбиғи таланты хаҡында үҙе лә белмәй әле. Фәҡәт рәсем дәрестәрендә еңел генә һыҙмаҡлап төшөргән һүрәттәренә һоҡланып, уҡытыусыларының: "Сынъяһау кеүек эшләгәнһең бит!" - тип маҡтап-күтәрмәләп ебәреүҙәре малайҙың күңелен үҫтерә. Көндәрҙең береһендә Мөнир механизатор булып эшләгән атаһының да бер-ике генә һыҙмаҡлауҙан хасил булған әтәс һүрәтен күреп, ғәжәп ҡыла. Атаһының: "Һүрәтте бына ошолай эшләйҙәр!" - тигән һүҙҙәре бөгөн дә ҡолаҡ төбөндә яңғырап киткәндәй. Кем белә, уҡыу эләккән булһа, Риза ағай ҙа, бәлки, билдәле рәссам булып китер ине. Хәйер, халҡыбыҙ - бөйөк ижадсы ул, һәр башҡорттоң күңел түрендә үҙе генә белгән хазина - бол яталыр, ләкин ул уны шарран-яра тышҡа сығарырға, башҡаларға белдерергә ашыҡмай. Эске хазина башҡортомдоң тышҡы тәбиғәтендә шулай ҙа барыбер һынлана, уның әҙәпле, кешелекле ғәмәлдәрендә күренә. Юҡҡа ғынамы ни, кеше психологияһы белгесе, һынсыл Толстой башҡорттарға эйәләгән, улар менән дуҫлыҡты юғары баһалаған.

...Арҡауыл урта мәктәбен тамамлап, медицина институты студенты булып киткәс тә әле йәш егет күңел түрендәге мая - һүрәт төшөрөү һәләтен ғәмәлгә ашырыу теләге менән янмай. Дөрөҫ, мәктәптә лә, институтта ла уның рәсем төшөрөргә оҫталығын күреп, стена газетаһы сығарыуға, башҡа төрлө яҙыу-һыҙыу эштәренә йәлеп итәләр. Ҡарышмай егет, ҡулы белгән шөғөлдө "һә" тигәнсе башҡарып та ҡуя. Хәҙер, үҙе әйтмешләй, ғүмер буйы ул ана шулай күңел биреп атҡара хеҙмәт бурысын. "Беҙ, ауыл балалары, бәләкәйҙән эшкә өйрәнеп, уны еренә еткереп башҡарырға күнеккәнбеҙ, был беҙҙең ҡанға һеңгән", - ти Мөнир Риза улы. Асылындағы даланы институт тамамлап, тыуған районына эшкә ҡайтҡас та үҙен әлегә әллә ни һиҙҙермәй. Хәйер, баштан-аяҡ эшкә сума йәш белгес, үҙен башҡа берәй шөғөлгә бүлгеләргә ваҡыты ла ҡалмаған булғандыр. Тәүҙә район санэпидстанцияһында табип булып эшләй башлай. Уның ойоштороу һәләтен тиҙ күрәләр һәм район Советы секретары, аҙаҡ район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр, район депутаты итеп һайлайҙар. Хатта Һаҡлыҡ банкының район бүлексәһе идараһы булып та эшләргә өлгөрә. 1995 йылда өмөтлө йәш кадрҙы Өфөгә саҡыралар. Бында ул БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ойоштороу бүлеге белгесе, ике-өс йылдан БР Кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченный урынбаҫары булып, хаҡлы ялға киткәнсе эшләй.





Тыуған йорт.

- 55 йәштә тыуған көнөмә балаларым буяу-бумала йыйылмаһы, рамланған бер нисә киндер полотно бүләк иткәйнеләр, һүрәт төшөрөүгә ныҡлап тотоноуым шунан башланды ла инде, - тип һөйләй Мөнир Риза улы. - Әле хаҡлы ялда башҡөллөй ижадҡа бирелеү өсөн форсат тыуҙы ла һымаҡ, ләкин миңә һаман ваҡыт етмәй, сөнки спортты ла ташлағы килмәй: волейбол, өҫтәл теннисы менән шөғөлләнәм, ҡыш саңғыла йөрөйөм...

Әйткәндәй, етенсе тиҫтәне ҡыуыуына ҡарамаҫтан, әңгәмәсебеҙ һаман да йәштәрсә тәҙ, еңел кәүҙәле, теремек ир азаматы. Күренеп тора: спорт күнекмәләре лә, ижад шөғөлө лә көс-ҡеүәт бирәләр уға. Хәйер, ижад итеү өсөн генә түгел, тәбиғи баҫалҡылығы менән әйтеп еткермәһә лә, һөйөклө ҡатыны Флорида ханым өсөн дә уның сәләмәт, позитив, көслө булыуы бик кәрәк. Ни өсөн тигәндә, 20 йылдан ашыу инде хәҙер Мөнир Риза улы ауыҙһыҙ яҙмышҡа дусар булып, түшәктә ятҡан ҡатынының эргәһенән китмәй тәрбиәләй, бала ҡараған кеүек эскерһеҙ хәстәрлекләй. Ирле-ҡатынлы Әбүбәкировтарҙы бер-бер береһенә тоғролоҡло пар аҡкоштар миҫалына хас легендаға тиңләге килә, ләкин яңғырауыҡлы һүҙҙәр улар өсөн түгелләген дә аңлайым: көндәлек ҡаһарманлыҡ улар өсөн күптән ҡабул ителгән, күнегелгән тәбиғи күңел торошо. "Мөнирғә рәхмәтлемен ғүмерем буйына. Хоҙай Тәғәлә ҡәҙерләмә артабан да көс-ҡеүәт өҫтәп, йәне-тәненә сәләмәтлек биреп торһон инде, тип теләйем. Ул - минең донъям, өмөтөм, ҡулдарым, аяҡтарым. Бындай кешеләр һирәк, улар алтынға бәрәбәр", - ти Флорида ханым.

Әбүбәкировтарҙың пар ҡанаттары булып үҫеп еткән ҡыҙҙары Элиза менән Алиса икеһе лә матур ғаилә ҡороп, ата-әсәләренә Мансур, Сәйет, Иҙрис, Кәрим, Әмир исемле тәүфиҡлы ейәндәр бүләк иткәндәр. "Кейәүҙәребеҙҙән дә уңдыҡ, - тип ҡыуана ҡыҙҙарының ата-әсәһе. - Эсмәй-тартмайҙар, бына тигән эшмәкәр, булдыҡлы балалар. Элизалар ғаиләһе әле - Дубайҙа, Алисалар Төркиәлә контракт буйынса эшләйҙәр..."

Эйе, бөтәһе лә һәйбәт һымаҡ, тимәк, күп йылдар күңелдә һаҡлап йөрөтөлгән хазинаны тышҡа сығарырға, киндергә төшөрөргә форсат тыуған күптән. Шулай итеп, өлгөрөп еткән күңел ихтыяжы үҙ емештәрен бер-бер артлы бирә башлай: камил теүәллектәге, профессиональ кимәлдәге картиналар ижад ителә. Тәүҙә үҙе өсөн эшләһә, тора-бара бик күп һүрәттәрен туғандары, дуҫтарына бүләк итә. Һәр бер полотно һайын оҫталыҡ та арта бара. "Күңелдә һәр ваҡыт буяуҙар менән киндергә төшөрөрлөк әйтер һүҙ, ихтыяж була", - ти рәссам. Пейзаж оҫтаһы булараҡ, уның әйтер һүҙе иһә, әлбиттә, тыуған еренә, күпте күргән Йүрүҙәненә, Ҡаратау һырттарына, ҡасандыр атаһы ҡара тирен һыпырып иген иккән баҫыу-ҡырҙарына, әсәһе менән бесән сапҡан сәскәле туғай-аҡландарына, тыуып-үҫкән ата йортона һөйөү һүҙе, уларҙы һағыныу тойғоһо.

- Һүрәт төшөрөү техникаһына, буяуҙар гаммаһын һайларға үҙаллы өйрәндем. Ә өйрәнер өсөн ҡат-ҡат эшләргә, төҙәтергә, ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе хатта юҡ итергә лә тура килде. Живопись серҙәренә төшөнөргә интернет та ҙур мөмкинлектәр асты, - тип һөйләй рәссам. - Үҙем яратҡан оҫталарҙың мәңәрләгән картиналарын ҡабат-ҡабат ҡарап сығырға, анализларға тура килде...

Шуныһы ғәжәп: Мөнир Әбүбәкиров үҙ картиналарын күбеһенсә натуранан түгел, яттан, күңел һәм күҙ хәтеренән, бала саҡ иҫтәлектәренән сығып төшөрә. Мәҫәлән, "Ҡаратау урмандары" серияһынан пейзаждар, "Ҡаратауҙа яҙ", "Ҡылған", "Бейек үләндәр", "Ҡышҡы миләш", "Йүрүҙән буйында", "Күк әрем", "Көҙ", "Көнбағыштар", "Баҫыуҙа", "Алмағастар сәскәлә", "Ҡурай менән натюрморт", "Тыуған йорт" һәм башҡа картиналары ана шундай үҙенсәлекле ысул менән ижад ителгән. Был әҫәрҙәрҙә, әйтерһең дә, тыуған яҡ моңдары сыңлай, сәскәләр, яңы сабылған бесән еҫе аңҡый, күпте күргән Йүрүҙәндең тын ағышы ишетелгәндәй...

Рәссамдың ижад өлгөләре уның сәнғәтте баһалай белеүсе яҡташтары булышлығында тыуған Арҡауылында күргәҙмәгә ҡуйыла, "Башҡортостандың беҙ яратҡан рәссамдары" конкурс-проектында ҡатнашып, 2 меңдән ашыу картиналары ҡуйылған 108 рәссам араһында еңеүсе булып сыҡҡан алтау иҫәбендә Мөнир Риза улы иң күп тауыш йыйыуға өлгәшә. Онлайн форматта үткән был проектты миллиондан ашыу кеше ҡарай. Әлеге ваҡытта Мөнир Әбүбәкиров баш ҡалабыҙ Өфөлә шәхси күргәҙмәһен үткәреү мөмкинлеген эҙләй, ләкин беҙҙә һәүәҫкәрҙәргә юл ярыуы бик ҡыйын, күргәҙмә залдары һәм бөтөн иғтибар профессионалдар өсөн генә эшләй. Һәүәҫкәр ижадтың башҡа төрҙәре, әйтәйек, фольклор коллективтары, вокал һәм бейеү төркөмдәренә үҙ таланттарын күрһәтеү, оҫталыҡтарын камиллаштырыу өсөн тәғәйен ниндәй ҙә булһа майҙансыҡтар, мәҙәниәт һарайҙары, телепроекттар бар, ә бына һәүәҫкәр рәссамдар был йәһәттән дәүләт һәм йәмәғәтселек иғтибарынан ситтә ҡалып, үҙ йүндәрен үҙҙәре күрергә мәжбүр. Баш ҡала уларҙы берләштергән берәй ижади ойошма төҙөлөп, шәхси күргәҙмәләр ойоштороу хәстәрлеген күреүсе, һәүәҫкәр рәссамдарҙың күргәҙмәләре өсөн зал табырға булышлыҡ итеүсе бағыуслар кәрәк ине. Был Мөнир Әбүбәкировтың ғына түгел, күп һәүәҫкәрҙәрҙең теләге. Тик уны кем ишетер?

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

✓ *Беҙҙең факультетты тамамлаусылар урман хужалығы техникаһын хеҙмәтләндереүсе техник-механик булып ҡына сыҡмай, ә техниканың барлыҡ төрө менән дә эшләй ала.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҒҮМЕРҘЕ НИ ҠЫҪҠАРТА?

■ Көҙгөләге сағылышығыҙ үҙегеҙгә оҡшамай башлаһа, йәшәү рәүешен үҙгәртергә ваҡыт еткән, ти белгестәр. Мәҫәлән, бер юлы бер нисә эште башҡарыу стресҡа алып килә. Сөнки был осраҡта үҙең менән ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо арта, ә ул ирекле радикалдар барлыҡҡа килеүенә йоғонто яһай. Тәм-том ятатыу ҙа насар ғәҙәт. Артыҡ килограмдарҙан тыш, ул тышҡы ҡиәфәттә сағылыш табасаҡ. Шәкәр молекулалары протеин һәм майҙарҙы үҙенә тарта. Был процесс тиренең тәбиғи ялтырауын, тонусын юғалтыуға, шулай уҡ һырҙарға алып килә. Матур булып ҡалырға теләүселәр шәкәрҙе йәшелсә-емеш, бал менән алыштырырға тейеш. Даими рәүештә йоҡо туймау ҙа ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Һәр кеше төүлегенә ете сәғәт ял итергә тейеш. Британия ғалимдары шулай уҡ ултырып эшләүселәрҙе лә хәүеф төркөмөнә индерә. Бер сәғәт ултырып телевизор ҡарау ғүмерҙе 22 минутҡа ҡыҫҡарта, ти улар. Компьютер артында ярты сәғәттән күберәк ултырырға тура килһә, 30 минут һайын тороп, хәрәкәтләнеп алырға кәрәк.

■ Балаларҙың иртәнге ашында аҡһым мотлаҡ булырға тейеш, тип белдерә Пенсильвания университеты диетологтары. Уларҙың фекеренсә, иртән углевод ашаһан, тиҙерәк асығаһың һәм төшкә ашта артыҡ калория йыяһың. Тикшеренеүҙәрҙә 8-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан. Уларға һәр берәненең дөйөм энергетик ҡиммәте 350 калория булған өс төрлө иртәнге аш тәҡдим ителгән. Бынан һуң балалар уйнаған һәм төшкө ашты тағы ла һайлап алған. Иртән аҡһымдан торған ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр углевод ашаусыларға ҡарағанда төш мәлендә яҡынса 4 процентҡа аҙыраҡ ашаған. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн 4 процент бәләкәй һан түгел, ти белгестәр һәм баланың иртәнге ашына күберәк иғтибар бирергә саҡыра.

■ Америка ғалимдары ҙур һорау менән файҙаланылған ирен буяғыс төрҙәрен тикшереп, ирен буяғыс ҡулланыу һәм ашҡаҙан яман шеше үҫеше араһында туранан-тура бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Тикшереүҙә ҡатнашҡан һәр өлгөнөң составында ҡурғаш, хром, кадмий, алюмин кеүек ауыр металдар булған. Әгәр ҙә бындай ирен буяғыс менән гел ҡулланһаң, онкологик сир барлыҡҡа килеү ихтималлығы ла арта. Ирендәрҙең нескә тиреһе хром һәм башҡа токсик матдәләрҙе һеңдерә, шул рәүешле организм ағыулана. Ғалимдар хәҙер косметик сараларҙың составын контролдә тотоу өсөн нормаларҙы яңынан ҡарарға кәрәк, тип билдәләй. Евросоюзда бындай нормалар ҡатыраҡ, әммә Рәсәй баҙарына төрлө, шул иҫәптән хәүефле продукттар ҙа инә. Белгестәр раҫлауынса, ирен буяғыс ҡына түгел, шампунь, дезодорант кеүек саралар ҙа сәләмәтлеккә зыян килтерә.

■ Макгилла университетында ғалимдар баш мейеһенең төрлө тауыштарға реакцияһын тикшереп ҡараған. Эксперимент өсөн өс эмоция - ярһыу, шатланыу, һағышланыу алынған. Тикшеренеүҙәрҙә 25 кеше ҡатнашҡан, улар билдәле бер тауыштар буйынса кешенең эмоциональ торошон билдәләргә тейеш булған. Шатланыуҙы таныу иң еңеле булған, шул уҡ ваҡытта ярһыу менән һағышланыуҙы айырыуы ауыр, әммә баш мейеһендә кеше ярһыған саҡта айырыуса оҙайлы әүҙемлек барлыҡҡа килә.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# УЛАРҘЫҢ ҺӨНӘРЕ...

## ауылдарға ла йән өрәсәк



**Бөгөнгө юғары технологиялар заманында училище-техникум тураһында һүҙ сыҡһа, бәғзеләрҙең танау сирып ҡына ҡуйыуы ла мөмкин, сөнки хәҙерге ваҡытта бары тик юғары белем тураһындағы танытма ғына абруйлы һанала. Шул уҡ ваҡытта мәшғүллек хеҙмәттәренең базаһына күҙ һалһаҡ, унда тик эшсе профессиялары талап ителә. Тимәк, боронғолар "Һин дә мулла, мин дә мулла - атҡа бесән кем һала?" тигән һорауҙы белеп күтәргән - кемдер эшсе хеҙмәтен дә башҡарырға тейеш. Ғөмүмән, ҡулы эш белгәндәр тормошта бер ваҡытта ла юғалып ҡалмай, шуға ла ҡасандыр мәктәптәрҙә уҡ эшсе һөнәренә өйрәтеп, яңы тарих башланғанда был тәжрибә бөтөрөлһә, хәҙер иһә һәр яңылыҡ - ул онотолған иҫкелек, тигәндә хәтергә төшөрөп, ҡабаттан эшсе һөнәрҙәренә иғтибар арта, хатта "Йәш профессионалдар" чемпионаты уҙғарыла.**

Башҡортостанда элек-электән ергә бәйле һөнәрҙәргә иғтибар ҙур булған һәм әле лә был традиция дауам итә. Рәсәйҙең иң оло һәм республиканың иң тәүге һөнәри уҡыу йорттарынан һаналған, тарихы 1877 йылда башланған Өфө урман хужалығы техникумы ла ер үлсәү училищеһы булараҡ барлыҡҡа килә. Бөгөн ул ике (көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу) бүлектән торған, бюджет һәм коммерция нигеҙендә белем биргән абруйлы уҡыу йорттарынан һанала, ул ғына ла түгел, студенттарҙың 80 процентын ауылдан килгән балалар тәшкил иткәнлектән, ауыл балаларына ҡала мөхитенә инеп китеүҙе еңеләйтергән бер утрау һымаҡ та.

Техникумда "Урман һәм урман-парк хужалығы" (ситтән тороп уҡыу мөмкин), "Күтәреүсе транспорт, төҙөләш, юл машиналары һәм ҡорамалдарын техник эксплуатациялау (тармаҡтар буйынса)" (ситтән тороп уҡыу мөмкин), "Баҡса-парк һәм ландшафт төҙөләшө", "Ағас эшкәртеү технологияһы", "Ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре", "Ер ҡоролошо" һөнәрҙәре буйынса уҡырға була. Күптәр техникумды тамамлағас, юғары уҡыу йорттарына инеп, белем алыуын дауам итә. Техникум Башҡорт дәүләт университетының география факультеты, Башҡорт дәүләт нефть-техник университеты, Урал дәүләт урман-техник университеты (Екатеринбург ҡалаһы), Санкт-Петербург дәүләт урман-техник университеты, Мәскәү дәүләт урман университеты, Мари дәүләт техник университеты (Йошкар-Ола) менән хеҙмәттәшлек итә. Әгәр юғары уҡыу йортонда техникумды тамамлаусыларҙан бер төркөм - 15 кеше йыйылһа, уларҙың уҡыу ваҡыты ҡыҫҡартыла, 11-ҙе тамамлап килгәндәр 4 йыл уҡыһа, техникумды тамамлаусыларҙан тупланған төркөм бер йылға кәмерәк уҡый.

Шулай уҡ техникумдың төп күрһәткестәренең береһе - уҡыу йортон тамамлағандан һуң эшкә урынлашыу күрһәткесе. Был йәһәттән сығарылыш курсынан йыл да 76 процент (армияға алыныусы егеттәрҙе лә индереп) эшкә урынлаша. Теория уҡыу һәм производство практикалары ваҡытында ныҡышыла һәм ойошмалар шунда уҡ уҙҙәренә эшселәр һайлай. Студенттар "Лимонарий" уҡыу-тәжрибә хужалығында, трактодром полигонында, техникумдың уҡыу-производство оҫтаханаһында, күп функциялы үҙәктәрҙә, Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығында, Өфө урман хужалығында, "Горзеленхоз" МБУ-һында, "Уральский лес" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттә, "Башавтотранс", Башкиравтодор, "КамАЗ" (Яр Саллы) ойошмаларында практика үтә. Ҡайһы бер ойошмаларҙа практика түләүле, йәғни студенттар эш хаҡы ла ала.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

*Ләйсән ӘХМӘТОВА, "Ер ҡоролошо" факультетының 3-сө курс студенты:* Был уҡыу йылы беҙҙең өсөн бик ҡатмарлы булды, сөнки коронавирус эпидемияһы сәбәпле онлайн уҡырға ла тура килде. Бындай уҡыуҙың ыңғай һәм кире яҡтары ла бар. Өйҙә уҡығанда дуҫтар, курсташтар менән аралашыу, белмәгәнеңде бергәләп асыҡлау мөмкинлеге юҡ. Ә көндөҙгө бүлектә уҡығанда иһә бер-берең менән аралашаһың, аңламағаныңды шунда уҡ асыҡлайһың, һорайһың. Шуға күрә бындай шарттарҙа уҡыуы, предметты үҙләштереүе еңелерәк. Әлбиттә, оффлайн уҡығанда техникумда ойошторолған төрлө түңәрәктәргә йөрөйбеҙ, уҡыу йортоноң йәмәғәт тормошонда ҡайнап йәшәйбеҙ.

Беҙҙең факультетта ер менән бәйле белем алабыҙ, геодезия буйынса ла эшләй алабыҙ. Бөгөн ер мәсьәләләре көн үҙәгендә булғанда, беҙҙең һөнәргә ихтыяж булыр тип уйлайым, сөнки ер үлсәү, межаларға бүлеү, документтар менән эшләү һәр саҡ актуаль булып ҡаласаҡ. Юғары белем алырға теләгәндә Башҡорт дәүләт аграр университетында, Екатеринбургта, башҡа ҡалаларҙа артабан уҡырға мөмкин. Юғары белем алғас иһә нефть йәки ҡаҙылма байлыҡтар табылған ерҙәрҙә лә эшләргә була.

*Марсель ӘХМӘТШИН, "Урман һәм урман-парк хужалығы" факультетының 3-сө курс студенты:* Минең атайым да урмансы, шуға алдымда ниндәй һөнәр һайларға тигән һорау торманы. Беҙҙең факультеттан, нигеҙҙә, урман хужалығы белгестәре сыға. Урман ултыртыу, ағастарҙы ҡарау, ауырыуҙарынан дауалау, янғындарҙы булдырмау йәки янғын сыҡҡанда уларҙы һүндереү, йәғни урман менән бәйле эштәрҙе комплекслы алып барыу - төп бурысыбыҙ буласаҡ.

Мин көрәш менән шөғөлләнәм, күнекмәләргә ваҡыт күп китә. Ятаҡтың беренсе ҡатында көрәш залы бар, шунда шөғөлләнәбеҙ. Шулай уҡ грек-рим көрәшенә лә йөрөйөм. Мәктәптә уҡыған саҡта республика чемпионы ла булғайным, техникумда артыҡ уңыштар юҡ әле. Әлеге ваҡытта спорт залында ремонт булыуы бәкәлгә һуға, әммә яңы уҡыу йылында яңы спорт залында шөғөлләнә башларбыҙ, моғайын.

*Илһам АБДРАХМАНОВ, "Күтәреүсе транспорт, төҙөләш, юл машиналары һәм ҡорамалдарын техник эксплуатациялау" факультетының 2-се курс студенты:* Һайлаған һөнәремә килгәндә, ғәҙәттә, техникаға ҡағылышлы механик тигәндә, кешенең күҙ алдына иң элек майға ҡатҡан кейемдә машиналар ремонтлап йөрөгән кеше күҙ алдына баҫа. Әммә ысынбарлыҡ улай түгел: техник-механик һөнәренең асылы шунда - улар мастер, етәксенең уң ҡулы тиергә лә була. Улар хужалыҡтарҙағы махсус техникаға техник хеҙмәтләндереү үткәрә. Мәҫәлән, бер техника бер йыл йөрөнө икән, уның сыҙымы күпме, күпме май "ашай", фильтрҙарын күпме ваҡыттан һуң алмаштырырға - шундай сығымдарҙы һанап сығарып, иҫәпләүҙәр эшләй. Шуға ла беҙҙең факультетты тамамлаусылар урман хужалығы техникаһын хеҙмәтләндереүсе техник-механик булып ҡына сыҡмай, ә техниканың барлыҡ төрө менән дә эшләй ала. Йәғни беҙҙе өйрәтеүҙәренсә, техник-механик - ул ремонт аҫҡысы тотоп йүгереп йөрөгән кеше түгел, ә калькулятор тотоп йүгереп йөрөүсе белгес.

Уҡыуҙан буш ваҡытымды күбеһенсә тренажер залында үткәрәм, гер күтәреүҙе үҙ итәм. Баймаҡтағы лицейҙа уҡығанда ла ошо спорт төрө буйынса урындар ала инем, техникумға килгәс тә уңышлы сығыштарым булды. Шулай уҡ турникта күнекмәләр эшләргә яратам, еңел атлетика менән шөғөлләнәм. Районда ике тапҡыр 12 километрға кросс йүгергәйнем, бында килгәс тә йүгереп ҡараным, әммә ҡала егеттәре көслөрәк булып сыҡты.

*Розалия ХИСМӘТУЛЛИНА, "Ағас эшкәртеү технологияһы" факультетының 3-сө курс студенты:* Минең һайлаған һөнәремдең үҙенсәлеге шунда - беҙ ағасты эшкәртеп, мебель эшләйбеҙ. Бөгөн урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа иғтибар ҙур булғанда, ниндәй ағас нимәгә ярай икәнен, уларҙы эшкәртеү серҙәрен һәм технологияһын белһәң, мебель эшләү буйынса үҙ эшеңде лә асырға, заказ буйынса эшләргә лә мөмкин. Быйыл өс заводҡа практикаға барҙыҡ һәм унда ағасты эшкәртеүҙе үҙ күҙебеҙ менән күрҙек. Практика ваҡытында үҙеңдең белемеңде һынап ҡарайһың һәм үҙеңде күрһәтһәң, киләсәктә эшкә лә саҡыралар. Шуға, киләсәктә эшһеҙ ҡалмабыҙ тип уйлайым.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

✓ *Уйланығыҙ. Тормошоғоҙҙо яҡшыртыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе лә ғәмәлгә ашырҙығыҙмы? Әлбиттә, юҡ. Тимәк, төҙөү, ижад итеү тамамланмаған әле. Моғайын, шуның өсөн дә Булдырыусы беҙҙе ошо ергә ебәргәндер.*



*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА...*



# ТАЖЗӘХМӘТКӘ ЮЛЫҠМАЙЫМ, ТИҺӘҢ...

## Уйҙырмаларға - фашлама

*Интернетта һәм ватсапта вакцина хаҡында әллә күпме уйҙырма йөрөй. Уларҙың авторҙарының медицинаға ла, вирус хаҡында белемгә лә һәм, ғөмүмән, фәнгә лә бер ниндәй ҙә ҡатнашлыҡтары юҡ, ти белгестәр һәм ошо уйҙырмаларҙың ин таралғандарына шундай аңлатма бирә.*

**1-се уйҙырма: "Танышымдың танышы прививканан һуң сирләгән. Тимәк, һеҙҙең вакцина - ул буш нәмә".**

- Вакцина яңы коронавирустың ауыр эҙемтәләренән 100 процентҡа һаҡлай. Әгәр прививка эшләткән кеше ауырый ҡалһа, ә бындай хәл бик һирәк күҙәтелә, сир еңел үтә. Статистика буйынса уларҙың береһе лә реанимацияға һалынмаған. Вакцинаның һөҙөмтәлелеге 90 процент тәшкил итә, һәм ул коронавирустың бөтөн төр штамдарынан да һаҡлай, - ти медицина фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы ағза-мөхбире, профессор, Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры Валентин Павлов. - "Спутник V" вакцинаһы донъяла иң яҡшыларҙан, уны 30-ҙан ашыу ил һатып ала. Рәсәйҙәр өсөн ул бушлай эшләнә, вакцинанан һуңғы эҙемтәһе бик әҙ. Бөгөнгө көнгә республикала 400 меңдән ашыу кеше прививка эшләткән, шуларҙың бары 5 проценты ғына тән температураһы 38 градусҡа тиклем күтәрелеп, баштары ауыртҡан, хәлһеҙлек күҙәтелгән, былар вакцинанан һуңғы тәбиғи хәл.

**2-се уйҙырма: "COVID-19"-ҙан вакциналар минең ДНК-ны боҙоп, уның кодын бутаясаҡ".**

- Был мөмкин хәл түгел. Вакциналарҙың ДНК менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Улар башҡа төрлө эш башҡара - иммун күҙәнәктәрен коронавирустың генетик фрагменттары менән "таныштыра". Күҙәнәктәр уны эсендә ҡалдыра һәм вирустан һаҡлаусы антиматдәләр эшләп сығара башлай. Бында ДНК-ның бер ҡатнашы ла юҡ, - ти биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Мәғариф академияһы ағза-мөхбире, БР Фәндәр академияһы академигы, Биохимия һәм генетика институты директоры вазифаһын башҡарыусы Эльза Хөснөтдинова.

**3-сө уйҙырма: "Вакцина эшләтһәм, сәләмәт бала таба алмаясаҡмын."**

- Вакциналау менән ауырға ҡалыу, яралғы үҫеше һәм сәләмәт бала табыу араһында бер ниндәй бәйләнеш тә юҡ. Ғалимдар махсус тикшеренеү үткәргән: "Спутник-V" менән прививкаланған сыҫҡандар һау-сәләмәт нәҫел биргән. Әгәр һеҙ ауырға ҡалырға теләһәгеҙ һәм шул уҡ ваҡытта вакцина эшләткәнһегеҙ икән, хафаланмағыҙ, бөтәһе лә яҡшы буласаҡ. Вакцинанан ҡурҡмағыҙ! Әгәр бала тапҡандан һуңғы айҙарҙа сир йоҡтороу хәүефе була ҡалһа, сабыйығыҙҙы ул тыуғандан һуң сир йоҡтороуҙан һаҡлағыҙ, - ти Өфө инфекция госпиталенең баш табип урынбаҫары Айгөл Ғәлиева.

**4-се уйҙырма: "Мин сирләнем һәм һауыҡтым. Миңә прививка кәрәкмәй".**

- Ауырыған кешеләрҙең иммунитеты вакциналауға ҡарағанда көсһөҙөрәк. Сирләгәндән һуң кешеләрҙе вакциналау коронавирус инфекцияһының яңы штамдары килеп сығыу менән бәйле, ә ауырығандан һуң ҡабатлап сир йоҡтороу хәүефе һаҡлана. Бөтәһенең дә пандемияға тиклемге ҡәҙимге тормошҡа әйләнеп ҡайтҡыһы килә, сикләүҙәрһеҙ, эшләүсе иҡтисады булған илдә, сир йоҡтороуҙан ҡурҡмайынса эшкә, уҡыуға, ғөмүмән, ҡайҙа теләй, шунда барғылары килә. Быға беҙ эпидемияға ҡаршы саралаҙы теүәл үтәп, иң мөһиме, халыҡтың 60 проценты вакцина яһатып, коллектив иммунитет булдырып ҡына өлгәшә алабыҙ, - ти медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй медицина фәндәре академияһының ағза-мөхбире, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы Вил Тимербулатов.

## Вакцина төрҙәре тураһында

*Рәсәй - коронавирустан үҙенең ос төрлө вакцинаһы булған берҙән-бер ил, тиҙҙән дүртенсе вакцина әҙер буласаҡ. Табиптар пациенттарына прививка яһау өсөн улар организмына ярашлыһын, йәғни теге йәки был компоненттың аллергия эҙемтәһе бирмәгәнен һайлап ҡуя ала. Әйҙәгеҙ, уларҙың һәр береһен ентекләберәк ҡарап сығайыҡ.*

**"Гам-Ковид-Вак" (сауҙа маркаһы "Спутник V").** Эшләп сығарыусыһы- Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Гамалеи исемендәге эпидемиология һәм микробиология ғилми-тикшеренеү үҙәге. Рәсәйҙә һәм донъяның 30-ҙан ашыу илендә теркәлгән, Евросоюз һәм Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһында теркәлеүгә заявка бирелгән. Үрсеү һәләтен юғалтҡан кеше (тере) аденовирусының ике төрлө штамы нигеҙендә эшләнгән. Һөҙөмтәлелеге: 91,4 процент, ауыр сиргә ҡаршы - 100 процент. Эҙемтәһе: грипп менән сирләгәндәге кеүек. Температура күтәрелә, өшөтә, тән һыныға. Иммунитет мөҙҙәте - ике йылға тиклем.

**"Кови-Вак".** Эшләп сығарыусыһы- М.П.Чумаков исемендәге тикшеренеүҙәр һәм иммунобиологик препараттар эшләп сығарыусы федераль фәнни үҙәк. Был "үлтерелгән" коронавирус нигеҙендә эшләнгән классик "совет" вакцинаһы. Һөҙөмтәлелеге - 85 процент. Эҙемтә тәьҫире: бик көслө эҙемтәһе теркәлмәгән, 15 процент кешелә укол урынында еңелсә ауыртыу, 1 процентында шул урында барлыҡҡа килгән тығыҙлыҡ. Бик һирәктәрҙә баш ауыртыу һәм юғары температура күҙәтелгән. Иммунитет мөҙҙәте ярты йыл (һынауҙар дауам итә әле).

**"ЭпиВакКорона".** Эшләп сығарыусыһы - Роспотребнадзорҙың "Вектор" вирусология һәм биотехнология фәнни үҙәге. Рәсәйҙә һәм Төркмәнстанда теркәлгән. Һөҙөмтәлелеге 100 процент. Эҙемтәһе: көслө сирләү осрағы теркәлмәгән, укол урынында ауыртыу һиҙелә. Температура 38,5-кә тиклем күтәрелеүе ихтимал. Иммунитет мөҙҙәте кәмендә бер йыл.

## Вакцинаны ҡайҙа эшләтергә?

- Ҡала һәм район поликлиникаларында. Вакциналау пункттары ялһыҙ һәм тәнәфесһеҙ иртәнге 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй.
- Мобиль прививкалау пункттарында. Эш көндәре төшкө 1-ҙән киске 8-гә тиклем, ял һәм байрам көндәрендә иртәнге 10-дан киске 8-гә тиклем эшләй, алдан яҙылыу мотлаҡ түгел.

**Ковидтан вакцина эшләтеү өсөн алдан яҙылырға ла була:**

- Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша
- "Табипҡа" мобиль ҡушымта йәки doctor.bashkortostan.ru (БР Докторы) республика сайты аша
- Колл-үҙәктең берҙәм телефоны аша - 122
- Ковидҡа ҡаршы үҙәк аша - 8(347)218-19-19.

## Вакциналауға нисек әҙерләнергә?

- Вакцинаға тиклем - 2 һәм унан һуң 3 көн алкоголь ҡулланыуҙы сикләргә.
- Уколдан алда һәм аҙаҡ бер-ике көн арымағыҙ, үҙегеҙҙе баҫсала йә спорт залында физик эш һәм күнекмәләр менән йонсотмағыҙ. Саф һауала шәп аҙымлап йөрөргә сығыу файҙалы.
- Йоҡоғоҙҙо туйҙырығыҙ. Һигеҙ сәғәттән дә кәм булмаған сәләмәт йоҡо вакцинанан һуң иммунитет эшләнеп сығарыуҙы тиҙләтә.
- Вакцина алғандан һуң бер-ике көн мунса, сауна инергә, бассейнда булырға, ҡояш аҫтында йөрөргә ярамай. Иртәнге 11-гә тиклем һәм киске сәғәт 5-тән һуң ғына ҡыҙынырға ярай.
- Аҡһым булған ризыҡтарҙы күберәк ашағыҙ. Улар организмда антиматдәләр булдырыуға ярҙам итә.

**"БАШИНФОРМ"дан.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Эшҡыуарлыҡта - изгелек

Беҙ, изгелек йоғошло, тинек. Шулай уҡ яуызлыҡ та йоғошлоларҙан һанала. Беҙгә һайлау хоҡуғы бирелгән. Эшҡыуарлыҡ бындай һайлау өсөн бигүк уңышлы булмаған өлкәлер. Сөнки изгелек юлы яуызлыҡҡа ҡарағанда файҙаһыҙыраҡ кеүек күренә. Һәр хәлдә, һүҙ тиҙ күрелгән файҙа тураһында барһа.

Мәҫәлән, һеҙҙең кинотеатрыһыҙға кеше йөрөмәй. Килемегеҙ кәмей. Хаҡтарҙы арттырырға кәрәк, тиһегеҙ һеҙ, сөнки тап ошо юл һеҙгә хәл-тороштан сығыу юлы булып күренә. Һеҙ хаҡтарҙы арттыраһығыҙ. Килемегеҙ арта, ләкин һеҙҙең фильмдарығыҙға барыбер ҡайны бер кешеләр йөрөмәй. Улар өйҙә генә ултырып телевизор ҡарауҙы хуп күрә. Килемегеҙ тағы кәмей. Икенсе тапҡыр һеҙ икенсе төрлө, яҡшыраҡ юл табырһығыҙ, тип әйтеп буламы? Ай-һай...

Йәки һеҙ аҙыҡ-түлек етештерәһегеҙ. Сифаты насарыраҡ продукция сығарыу осһоҙораҡ, әммә һеҙ күберәк килем ала алаһығыҙ. Шуға ла һеҙ сифатты төшөрөп, килемегеҙҙе күтәрәһегеҙ. Башта һатып алыусы айырма күрмәй, ләкин бер аҙҙан ул юл ашаһындағы икенсе, продукцияның сифаты яҡшыраҡ булған магазинға йөрөй башлай. Йыл һуңында һатыу күләме кәмеү сәбәпле, һеҙ килемһеҙ ҡалаһығыҙ, ә теге магазин хужаһы шатлыҡтан балҡый.

АҠШ-тың эш биреүселәре һәр саҡ эшселәр менән конфронтацияла тора. Быларына ла, тегеләренә лә бәлештең ҙур, майлы киҫәге кәрәк. Һөҙөмтәлә ҡулланыусы тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн артығыраҡ түләй, инфляция быуып бара, һәм бынан бер кем дә файҙа күрмәй, бары тик юғалта ғына.

Әгәр эш биреүсе менән эшсе "Кем хаҡлы?" тип түгел, ә "Нимә дөрөҫ?", йәғни был тормошта йәшәү өсөн нимә яҡшыраҡ, тигән принцип менән йәшәһә, нимә булыр ине?

Шулай итеп, беҙ әйләп ҡына ниндәйҙер һығымтаға киләбеҙ. Уйланығыҙ. Тормошоғоҙҙо яҡшыртыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе лә ғәмәлгә ашырҙығыҙмы? Әлбиттә, юҡ. Тимәк, төҙөү, ижад итеү тамамланмаған әле. Моғайын, шуның өсөн дә Ижадсы, Булдырыусы беҙҙе ошо ергә ебәргәндер - беҙ төҙәлештә тамамларға тейеш.

* * *

Үҙендә кире уйҙар йөрөткән һәр кем ижад итмәй, ә емерә.

Беҙ, әлбиттә, тиҙәк тулы һарайҙан киткәнһе килмәгән һәм "Ни өсөн?" тигән һорауға: "Бында тиҙәк шул тиклем күп, тимәк, ҡайҙалыр пони булырға тейеш", - тип яуаплаған малайға оҡшай алмайбыҙ.

Шулай ҙа ыңғай уйҙар уйлау ауыр түгел. Ыңғай уйлы һәр кем төҙөүгә ярҙам итә. Ул Ижадсының арҡаҙашына әйләнә. Был донъяны яҡшыраҡ итергә тырышығыҙ, һәм һеҙ ундағы байлыҡтың бер өлөшөнә эйә булырһығыҙ. Һеҙ үҙегеҙ теләгән нәмәләрҙе һатып алырлыҡ аҡса булдырырға ғына түгел, ә уңыш өсөн кәрәк булғандың барыһына ла - дуҫлыҡҡа, мөхәббәткә, тыныслыҡҡа һәм үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтлеккә өлгәшергә теләйһегеҙ.

Ыңғай уйҙар уйлаһағыҙ, эштәрегеҙ ошо уйҙарҙың дауамына әүерелә. Ярҙам итергә, яңы нимәләр эшләргә, яратырға, бирергә әҙер булмай торop, үҙеңдә ышаныслы, эшлекле, ихтирамлы итеп тойорға ярамай.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**28 ИЮНЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

**БСТ**

**7.00 Профилактика с 07:00 до 14:00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Д/ф "Дон Кихот. История одной оперы". [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Живые и мертвые". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Бибинур, ах Бибинур". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**29 ИЮНЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.50 Наедине со всеми. [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм". [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости". .**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Живые и мертвые". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**3.15 Спектакль "Заблудшая". [12+]**

**30 ИЮНЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 "Модный приговор". [6+]
11.45, 12.10, 17.15, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
17.00 Новости (с субтитрами).
19.00 На самом деле. [16+]
20.05 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Наедине со всеми. [16+]
3.30 Мужское / Женское. [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм". [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Живые и мертвые". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**3.15 Спектакль Сибайского государственного башкирского драматического театра им. А. Мубарякова "Тамарис". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**

**1 ИЮЛЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.50, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 4.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Диана - наша мама". К 60-летию принцессы Дианы. [12+]
1.10 Наедине со всеми. [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм". [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.15, 23.00 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Брифинг по туризму и отдыху в Башкортостане.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Вечерний телецентр.**
**23.15 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Доминика". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**3.00 Спектакль Салаватского государственного башкирского драматического театра "Нәркәс". [12+]**
**5.15 Преград. net. [6+]**

**2 ИЮЛЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.00 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.50 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.15 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Х/ф "После свадьбы". [16+]
4.55 Д/с "Россия от края до края". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм". [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 17.15, 23.00 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**10.15, 16.30 Д/с "История вертолетов". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.30 Башкорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 5.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Воскресенье". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Спектакль Салаватского государственного башкирского драматического театра "Вишневая гора". [12+]**
**4.00 Детей много не бывает. [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

**3 ИЮЛЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/с "Остров Крым". [6+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 Х/ф "Власть". [18+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм, фольклориада!" [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00, 16.45, 23.00 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**10.15 "Физра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башкорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". 4 этап.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 "85 лет на страже дорог". [16+]**
**17.00 Церемония открытия VI Всемирной фольклориады.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2021". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Девять дней и одно утро". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**3.00 Спектакль БГАТ Д им. М. Гафури "Операция". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**4 ИЮЛЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 6.10 Т/с "Петербург. Любовь. До востребования". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Николай Рыбников. Парень с Заречной улицы". [12+]
14.50 Х/ф "Высота". [0+]
16.40 Д/ф "Александра Пахмутова. "Светит незнакомая звезда". [12+]
19.20 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. Финал. [16+]
23.10 Х/ф Премьера. "Один вдох". [12+]
1.05 Х/ф "Как украсть миллион". [6+]
3.10 Модный приговор. [6+]
4.00 Давай поженимся! [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм, фольклориада!" [12+]**
**9.00 Церемония открытия VI Всемирной фольклориады. [12+]**
**10.00, 16.45, 23.00 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**10.15 "Бейе". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [0+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 "Курай даны". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Посмотрим... [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Парад участников VI Всемирной фольклориады. Хоровод дружбы народов мира. Открытие главной площадки "Сердце фольклориады".**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Открытие главной площадки "Сердце фольклориады". Продолжение .**
**23.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**0.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "Дар". [12+]**
**2.15 Спектакль ГАРДТ РБ "Скупой". [12+]**
**4.30 Д/ф "Дон Кихот. История одной оперы". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 июнь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 июль Премьера! "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон). 16+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Июнь - Июль (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (17) дүшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 29 (18) шишәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (19) шаршамбы | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 1 (20) кесе йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 2 (21) йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 3 (22) шәмбе | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 4 (23) йәкшәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 29 ИЮНЬ - ПАРТИЗАНДАР КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Назар. Талхина. Акваланг. Ғариза. Әйтем. Лаос. Әлифба. Ур. Бытбылдыҡ. Итек. Азат. Тояҡ. Джерри. Вахта. Алиби. Шарт. Лена. Носов. Алма. Нуль.

**Вертикаль буйынса:** Әлибаев. Алтаҡта. Мамыҡташ. Таба. Аманат. Ләлә. Ашлама. Ҡатын. Уҡа. Оран. Гусар. Инес. Ранчо. Овал. Ғәләүетдинов. Идеал. Ильф. Антарктида.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## КҮРГӘҘМӘ...

**БР Милли музейы филиалы булған Салауат Юлаев музейында "Салауат тураһында хикәйәт" тип исемләнгән сәнғәт күргәҙмәһе асылды.**

Күргәҙмә "Рәсәй рәссамдары һәм скульпторҙары ижадында Салауат Юлаев тураһында хәтер" Музей-ара күргәҙмәләр проекты сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы Башлығының 2021 йылға мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәренә грант аҡсаһына тормошҡа ашырылған. Унда билдәле рәссамдар - башҡорт һынлы сәнғәте вәкилдәре: БАССР-ҙың халыҡ рәссамы һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Александр Бурзянцев, БАССР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Алексей Кузнецов, Рәсәй һәм сит ил күргәҙмәләрендә ҡатнашыусы Ғабдулла Мостафин һәм башҡа оҫталарҙың картиналары, шулай уҡ БАССР-ҙың халыҡ рәссамы һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Тамара Нечаеваның "Уксы" скульптураһын күрергә була.

## ЗАМАНСА ОПЕРА

**Былтыр старт алған заманса башҡорт операһы лабораторияһы проектына йомғаҡ яһалды. Тамаша Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә ойошторолдо.**

Заманса башҡорт операһы лабораторияһы театр миҙгеле дауамында тормошҡа ашырылды һәм бер нисә этаптан торҙо. Уның сиктәрендә либретто яҙыусылар, композиторҙар конкурсында 30-ҙан ашыу кеше ҡатнашты, улар өсөн оҫталыҡ дәрестәре, халыҡ-ара конференция ойошторолдо. Был киң проекты йомғаҡлау сараһында алты операнан өҙөк башҡарылды. Алты режиссер - Эльмира Әхмәтзарипова, Айһылыу Иҡсанова, Филипп Разенков, Тигран Довлатбекян, Ләйсән Сәфәрғолова, Шамил Сиразетдинов композиторҙар конкурсының алты еңеүсеһе әҫәренән өҙөк алып, сәхнәләштерелгән тамаша ҡуйҙы. Музыкаль өҙөктәрҙе дирижерҙар Марат Әхмәтзарипов һәм Владимир Мешков етәкселегендәге опера труппаһы, хор һәм симфоник оркестр йырсылары башҡарҙы. Әйткәндәй, проект БР дәүләт телдәре һәм халыҡтары телдәрен популярлаштырыу буйынса Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты ярҙамында бойомға ашырылды.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ЙҮКӘ СӘСКӘҺЕ

**Заман медицинаһында йүкә сәскәһенән яһалған төнәтмә һәм сәйҙәрҙе һалҡын тейеүгә бәйле ауырыуҙарҙы дауалағанда тирләтеүсе һәм тәндең температураһын төшөрөүсе сара булараҡ ҡулланырға кәңәш итәләр, шулай уҡ ауыҙҙы һәм тамаҡты сайҡау өсөн, ҡайһы берҙә гастрит менән яфаланғанда эсергә була.**

Халыҡ дауаһында йүкәнең ҡулланылышы киңерәк: баш ауыртыуынан, пневмония, ангина, ҡурылдай астмаһы, ревматизм, паротит (ҡолаҡ арты биҙенең шешеүе), бәүел юлына таш ултырыу, нефрит, ҡан ағыу, түлһеҙлек, невроз, көҙән йыйырыу, быума ауырыуҙарын дауалағанда кәңәш ителә. Йәш бөрөләрен һәм япраҡтарын тиреләгә сей яра, мастит булғанда ҡулланалар. Йүкә дегете менән экзема, һыҙлауыҡ, тиреләге сей яралар, эренле шеш, остеомиелит булғанда дауаланалар.

**Күрем килеүе боҙолһа.** Ҡәҙимге йышлығынан тайпылһа, үҙгәреүсән булһа, ауыртыу тойолһа Йүкә сәскәһенән сәй алыштырғыһыҙ ярҙамсы. Ваҡланған йүкә сәскәһенең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу иҫәбенән сығып төнәтмә әҙерләргә. Ярты сәғәт төнәтергә. Иртәнсәк йылы көйөнсә тотош бер стаканды эсергә, көндөҙ тағы ла 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Климакс.** Йүкә - составында ҡатын-ҡыҙҙың енси гормондарына яҡын фитогормондар булған һирәк үҫемлектәрҙең береһе. 45 йәште уҙған ҡатын-ҡыҙҙарға ярты йылға бер тапҡыр 1 ай дауамында иртәнсәк һайын 1 стакан йүкә сәйе эсергә кәрәк: климакс байтаҡ һүң киләсәк, ауыртыныу йәки ҡан килеүһеҙ буласаҡ.

**Простатит.** Йүкә ағасының янған торононан онтаҡ яһарға. Шул онтаҡтан 7 көн буйына ҡәһүә рәүешендәге эсемлек яһап, иртәнсәк һайын эсергә. Тулыһынса дауаланғансы ошо рәүешле ай һайын дауаланыу курсы үтергә.

**Йүтәл.** 15 грамм киптерелгән (йәки 5 грамм йәш) йүкә япрағына 1 литр эҫе һыу ҡойорға. Һыу ҡайнар булмаһын. Банканың ауыҙын нығлы ябып, 15 минут бешерергә. Кискелеккә 100-150 мл эсергә кәрәк. Сәй тәмгә әсе тойолһа, саҡ ҡына бал, шәкәр ҡушырға була. Сөнки йүкә ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтә.

**Һалҡын тейгәндә.** Был осраҡта тик сәскәләрен генә ҡулланырға кәңәш ителә. Таҙартыусы сәй яһау өсөн 2 балғалаҡ киптерелгән йүкә сәскәһенә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға. Ә һалҡын тейеүгә ҡаршы 4 балғалаҡ сәскәгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 8-10 минут төнәтеп көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Сәйҙе бер юлы тотош бөтөргәнсе эсергә.

**Экзема, псориаз, акне.** 50 грамм киптерелгән йүкә ҡабығына 1 литр һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм 10 минут ҡайнатырға. Йүкә ҡабығының шифаһы һыуға сыҡҡансы төнәтергә һәм шуның менән тәндең сирле урындарын сайырға.

**Әҫпе.** Тәненә әҫпе сыҡҡан балаларҙы йүкә сәскәһенең төнәтмәһе менән сайындырыу яҡшы. Кәстрүлгә 50 грамм сәскә һалып, 2 литр һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткереп, утын һүндерергә. 20 минут төнәткәндән һуң ҡулланыуға әҙер. 1 литр төнәтмәгә 100 литр таҙа һыу нисбәтенән сығып, төнәтмәне ваннаға уҡ ҡойорға мөмкин.

**Әйткәндәй, йүкәнең дә бер ҡулланырға ярамаған осрағы асыҡланған. Сәскәһенән бешерелгән сәйҙе даими эскәндә ҡапыл күҙҙәрҙең күреү һәләте түбәнәйергә мөмкин. Сәйҙе көн һайын түгел, ә йыш һәм оҙайлы ваҡыт эсеү тураһында һүҙ бара. Бигерәк тә йүкә сәскәһенең сәйен йыл дауамында эсергә ярамай.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БАШҠОРТТАРҘА БИҘӘКЛЕ ТУҠЫМА

**Туҡыусылыҡ - кешелек уйлап тапҡан иң уңышлы кәсептәрҙең береһе. Туҡымалар барлыҡҡа килгәндән һуң, уларҙы һуҡҡан саҡта уҡ, биҙәү ысулдары ла барлыҡҡа килгән.**

Боронғо туҡыусылыҡтың шундай нәфис өлгөләре һаҡланған. Уларҙың ҡайһы берҙәре халыҡ кейемдәренә бәйле, ҡайһылары йорт йыһазлау өсөн биҙәкләп туҡылған әйберҙәр. Кейемдә бигерәк тә байрам костюмы ҡупшы булған. Уға ҡулдан һуғылған туҡыманан тегелгән, итәге һәм ендәрендә яҫы биҙәк туҡылған ирҙәр күлдәге, алъяпҡыс, сатраш биҙәкле йөн итәктәр, биҙәкле ҡушаҡтар һәм башҡалар ингән. Көнкүрештә ҡулланылған әйберҙәр араһында етен ептән туҡылған ашъяулыҡ, таҫтамал, селтәрле япмалар, келәмдәр, юллыҡ, ябыуҙар айырым иғтибарға лайыҡ. Уларҙы кесерткән, киндер, етен сүстәренән, һарыҡ йөнөнән, дебеттән эшләгәндәр. Башҡорттарҙың сәмәрле туҡыусылығында халыҡтың матурлыҡ өлгөләренә һәм көнкүреш традицияларына ярашлы ижади үҙгәрештәр индерелгән Азия һәм Көнсығыш Европа компоненттары күҙәтелә.

Башҡорттарҙың биҙәкле туҡымаларының төп төрҙәре: аласа, аҫалап һәм күтәреп һуғылған туҡымалар, күп көрөслә туҡыу әйберҙәре. Һәр биҙәкле туҡыу төрөнөң үҙенә генә хас орнаменттар комплексы бар. Ҡулдан һуғылған әйберҙәр ҡабатланмаҫ биҙәге, бай орнаментлы булыуы, ептәр ишелешенән төрлөлөгө менән айырылып тора. Иғтибарығыҙға башҡорттарҙың биҙәү-ҡулланма сәнғәтенә бағышланған "Биҙәкләп һуғыу" тип аталған карточкалар йыйылмаһын тәҡдим итәбеҙ. Унда Башҡортостан Милли музейында һаҡланған әйберҙәр тупланған. Йыйылманы Р.А. Хафизова, А.Р. Хөснуллин төҙөгән, яуаплы редакторы тарих фәндәре докторы, РФ һәм БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре Р.З. Янгужин.



Шаҡмаҡтары күтәреп һуғылған аласанан ашъяулыҡ. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш районлары



Шаршауҙағы көрәҙ биҙәк



Күп көрөслә алым менән һуғылған туҡымалар



Ваҡ орнаментлы шаршау



Таҫтамалдарҙа һирәк осрай торған, келәмдәргә хас булған үҙәкләштерелгән орнамент өлгәһе: бер нисә ҡатлы ҡыя шаҡмаҡты ҡуш сук биҙәк уратып алған



Сүпләмләп һуғылған өйкөм биҙәктәре аҫалы буйҙар менән өс өлөшкә бүленгән шаҡмаҡлы аласа таҫтамал



Эреле-ваҡлы ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған ҡатмарлы өйкөм биҙәк ике яҡтан "суҡлы" буйҙар менән бүленгән. Ҡара төҫ композицияны графикаға оҡшатып ебәрә



Биҙәкләп һуғылған киндер алъяпҡыс



Башҡортостандың үҙәк райондарында һуғылған һөлгө башы



Таҫтамалда ҡыҙыл һәм аҡ ептәрҙең сиратлашып килеүе аҡ туҡымаға һәр саҡ яңыса төҫ биргән



Һуғылған таҫтамалда ҡыйыҡ геометрик орнамент. Урта өлөштәге биҙәк күп планлы, экран рәүешендә. Ә тышҡы һыҙатта асыҡ төҫтәге ҡаймалар аҫтында асыҡ устар һүрәтләнгән



Оҫта туҡыусылар таҫтамалдың тиҫкәре яғындағы биҙәктең уң яғындағыһынан һис тә ҡайтыш булмауына өлгәшкән

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ АУЫҘЫНА...

## мисәт баҫып булмай

Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт бик борсолоп Остазы эргәһенә килә һәм: "Хөрмәтле Остазым, бергә уҡыған шәкерттәр ниңәлер миңә ҡырын ҡарай һәм был минең тормошомдо түҙеп торғоһоҙ итә. Ошо мөнәсәбәттә нисек үҙгәртергә була, әллә Һеҙ миңә артабан да түҙергә ҡушаһығыҙмы?" - тип һорай. "Был мәсьәләне еңел генә хәл итәбеҙ, - ти Остаз.- Дәрес ваҡытында һин минең эргәмә кил һәм ҡолағыма шыбырлаған бул. Мин дә һиңә яуап итеп шыбырлаған булырмын..."**

**Шулай итәләр ҙә. Был күренеш шунда уҡ бар шәкерттәрҙең дә ҡыҙыҡһыныу үҙгенә әйләнә. Күпмелер ваҡыттан һуң улар Остазға мөрәжәғәт итә: "О, беҙҙең Остазыбыҙ! Яраткан шәкертегеҙ менән нимә хаҡында шыбырлашыуығыҙҙы беҙгә лә әйтмәҫһегеҙме?" Остаз шәкерте менән шыбырлашыуҙың йөкмәткеһен әйтеп бирә:**

**- Һин үҙендең таҫырайған күҙҙәреңде йәшерә алаһыңмы? - тип һораным.**

**- Эйе, - тине ул.**

**- Һин күпме аҡса эшләнең? - тип һораным.**

**- Ун һум, - тине ул.**

**- Күпмеһен юғалттың? - тип һораным.**

**- Биште, - тине ул.**

**- 32-һе лә өйҙәме?- тип һораным.**

**- 29-ы ғына өйҙә, - тине ул.**

**Остаздың был хәбәренән бер ни ҙә аңламаған шәкерттәр тамам аптырап ҡала. Шунан улар аңлатыуҙы һорап, Остаздың яратҡан шәкертенә мөрәжәғәт итә.**

**- Барыһы ла ябай ғына, - ти шәкерт.- Остаз һеҙҙең ваҡ-төйәк менән булғанығыҙҙы белә, шуға ла һеҙгә һабаҡ бирергә теләне. Һеҙ Унын минең менән шыбырлашыуҙы миңә булған иғтибар билдәһе тип ҡабул иттегеҙ һәм миңә мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәрттегеҙ.**

**- Ләкин һеҙҙең был серле диалог ниҙе аңлата һуң? - тип ныҡыша шәкерттәр.**

**- Мин ун һум аҡса эшләгәйнем, уның биш һумын улымды уҡытыуға тотондом, - ти шәкерт.**

**- Ә 32 һаны, моғайын да, ниндәйҙер мөһим иҫәпте белдерәлер?**

**- Минең 32 тешем бар ине, 29-ы ғына тороп ҡалды...**

**- Улай булғас, һин беҙгә иң тәүге һорауҙың мәғәнәһен аңлат, - ти тамам аптырауға ҡалған шәкерттәр.**

**- Таҫырайған күҙҙәр - улар һеҙҙең күҙҙәр. Улар ҡомһоҙлоҡтан таҫырайған. Мин һеҙҙә ҡыҙыҡһыныу уятып, күҙҙәрегеҙҙең таҫырайыуын бөтөрҙөм. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡына ваҡ-төйәк менән булышыусыларҙы үҙгәртә ала.**

**- Был хәлдән беҙ ниндәй һабаҡ алырға тейеш һуң? - ти шәкерттәр тәрән борсолоу менән.**

**- Һабаҡ шундай: ҡомһоҙлоҡ, матди донъяла ла, рухи донъяла ла бәләкәй генә ҡәнәғәтләнеү бирә. Әммә ул һеҙгә артабан камиллашырға, юғары аңды үҫтерергә ҡамасаулай. Ҡомһоҙлоҡтан ҡотолдороу өсөн һеҙҙең уй-фекерҙәр ваҡ-төйәк тирәһенән китмәүен күрһәтергә кәрәк ине..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21026

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 399/06